Эй, көнсөллөк, һаранлыҡ үә тәкәбберлек,
Ундайҙарҙың йәне кәрлә, күңеле керле.
Күпме генә лаф орһа ла, ниндәй бәндә
Урап үткән үҙен көткән гүр-ҡәберҙе?
Белһен кеше үҙ самаһын, үҙ ҡәҙерен,
Тәкәбберлек саң-көл булыр хөкөм көндә.

Раул Бикбаев. "Өс йөҙ ҙә өс хәҙис".

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 - 21 МАРТ (БУРАНАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№11 (585)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡортостан биатлонсылары...**

Паралимпияла ике алтын миҙал яуланы




4

**"Урал" һүҙен бәләкәй хәрефтән яҙма,**

йәки Тәржемә эштәренә бер ҡараш



8-9

**Нисек бармын...**

мин шулаймын



10

**Туй йолаһы нисек атҡарыла,**

сит ҡалыптамы, үҙебеҙсәме?



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сифатһыҙ хеҙмәтләндереү менән осрашҡан ваҡытта үҙегеҙҙең ҡулланыусы хоҡуҡтарын файҙалана беләһегеҙме?

***Рәзилә АҠМАНОВА, банк хеҙмәткәре:*** "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында"ғы законды бик яҡшы беләм, тип әйтә алмайым, ләкин үҙемә ҡағылышлы ошондай хәл килеп тыуғанда хоҡуҡтарымды яҡлай алам. Әле күптән түгел генә нәҡ ошондай хәл менән осраштым. Магазиндан ҡыйбатлы һыуытҡыс һатып алдым, ләкин бер көн дә үтмәне, ул һүнде. Магазинға дәғүә яҙғас, мине сервис үҙәгенә ебәрҙеләр. Унда иһә ошо уҡ һыуытҡысты минән алда башҡа кешеләр һатып алып, шулай уҡ сервис үҙәгенә йүнәтергә алып килгәндәрен, бында иһә "һыуытҡыс ремонтлауға яраҡһыҙ", тигән һығымта яҙып бирелеүен белдем. Тимәк, магазин боҙоҡ һыуытҡысты кире һатыуға ултыртҡан һәм минең техниканы аңламауымдан, бер ҡатлылыҡтан файҙаланып, һатып ебәргән. Магазин хужалары, оҙаҡ дәғүәләшеп йөрөүҙән ялҡыр, тигән өмөттә булғандыр, мин килгән һайын төрлө сәбәптәр табып, аҡсаны кире ҡайтарыуҙы һуҙып килделәр. Шулай бер аҙна ваҡыт үтеп тә китте. Был минең зитыма тейҙе һәм үҙемдең хоҡуҡтарымды ныҡлап өйрәнеп, закон статьялары менән "ҡоралланып", сервис үҙәгенән тейешле белешмә алып, тағы ла магазинға юлландым. Минең беренсе тапҡыр дәғүә яҙыуыма 10 көн ваҡыт үтеп киткәйне, шуға күрә магазиндан тауар хаҡының һәр көнө өсөн 1 процент күләмдә неустойка (штраф) түләүҙәрен талап итеп, тағы бер дәғүә яҙҙым. Был арауыҡ эсендә мин һатып алған һыуытҡыс магазинға яңы, ҡыйбатыраҡ хаҡ менән сығарылды. Шуға күрә магазиндың миңә аҡсаны яңы хаҡ менән ҡайтарырға бурыслы булыуы, кире осраҡта судҡа мөрәжәғәт итәсәгем хаҡында белгерттем. Ошонан һуң ғына магазин етәкселеге барлыҡ талаптарымды үтәне һәм аҡсаны процентары менән кире ҡайтарҙы.

Бындай хәл менән осрашҡан ваҡытта юғалып ҡалмаҫҡа, үҙ талаптарыңды аныҡ һәм асыҡ итеп ҡуя белеү мөһим. Хәҙер интернет селтәрендә күп һорауҙарға яуап табып була. Шулай уҡ бушлай хеҙмәт күрһәткән юристарҙы ла табып кәңәшләшергә мөмкин. Иң мөһиме: алданып ҡалмаҫҡа һәм сифатһыҙ әйбер һатҡан йәки хеҙмәт күрһәткән кешене, ойошманы үҙ урынына ултырта белергә кәрәк.

***Айнур ИСЛАМОВ, полиция капитаны:*** Яңы йыл алдынан күптәнге хыялыбыҙ тормошҡа ашты - фатирлы булдыҡ. Күсеп йөрөү шул тиклем үҙәккә үткәндер инде, таныш риэлторыбыҙ ыҡсым, тәү ҡарамаҡҡа бер ниндәй етешһеҙлеге булмаған һәм сағыштырмаса арзан хаҡҡа фатир тәҡдим иткәс, йыйған аҡсабыҙға дуҫтар, туғандарҙан да бурысҡа аҡса алып өҫтәп, уны һатып алдыҡ. Ләкин шатлыҡ бер аҙ баҫылып, фатирҙы ентекләп ҡараған ваҡытта стеналарында ярыҡтар булыуын күрҙек. Белгестәр саҡырып күрһәткәс, ремонттың кеҫәне елле генә йоҡартасағы асыҡланды. Был хаҡта һатыу-һатып алыу килешеүен төҙөүсе риэлторға әйткәс, ул ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлаусы ойошмаға мөрәжәғәт итергә кәңәш итте. Улар иһә, үҙ сиратында, миңә бушлай юридик консультация бирҙе һәм фатирҙы һатҡан компанияға ремонт өсөн зыянды ҡаплауҙы талап итеп, дәғүә яҙырға ҡушты. Фатир - шул уҡ тауар, һәр бер тауар кеүек ул да билдәле сифат стандарттарына яуап бирергә тейеш, тип аңлатты ойошма хеҙмәткәрҙәре. Эште оҙаҡҡа һуҙмай, ярыҡтарҙың ни сәбәпле барлыҡҡа килеүен асыҡлау өсөн бойондороҡһоҙ экспертиза эшләттем. Шулай уҡ ремонт өсөн кәрәк буласаҡ сумманы күрһәткән смета төҙөттөм дә фатирҙы һатҡан компанияға мөрәжәғәт иттем. Әлеге ваҡытта уларҙың яуабын көтәм. Мәсьәлә ыңғай хәл итеререн ышанам һәм улар үҙ иҫәбенә ярыҡтарҙы "ямап" ҡуйырҙар йәки ремонт эшләтеү өсөн аҡса бүлерҙәр, тип уйлайым. Әгәр ҙә билдәләнгән ваҡыт эсендә етешһеҙлектәр бөтөрөлмәһә, судҡа ғариза яҙасаҡмын.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# БАШҠОРТСА ШАЯРТЫУ...

## балалар телендә лә ныҡлы урын алды

**"Шаяниум" йылына бер тапҡыр ғына үткәрелгәнгәме, тамашасы өсөн генә түгел, уның төп уйынсылары өсөн дә көтөп алынған оло ваҡиға. Был юлы шаяндар һәм отҡорҙар уйынының финал бәйгеһендә Өфө ҡалаһы мәктәптәренең ҡырҡтан ашыу командаһы араһынан һайлау турын уңышлы үткән иң көслө алты команда көрәште. Уларҙың һәр береһе "Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын" темаһын үҙҙәренсә төрлө яҡлап асырға тырышты. Уйын бик йәнле, шаяртыуҙар урынлы булды. Шулай ҙа был өлкәлә күберәкте белгән жюри ағзаларының фекерен тыңлайыҡ.**

(Дауамы 6-сы биттә).




"Ҡыҙыҡ-мажор" командаһы.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# СИТ ТЕЛДЕ...

## скайп аша



**Һөнәрем буйынса сит телдәр уҡытыусыһымын. Өфө мәктәптәренең береһендә белем бирәм. Юғары уҡыу йортон былтыр ғына тамамлағас, дәрестәрем күп түгел. Шулай уҡ мәктәптә пенсия йәшендәге уҡытыусыларҙың да эшләп йөрөүе йәштәрҙең дәрестәр һаныи бик кәметә. Дәрестәрҙең әҙ булыуы эш хаҡына ла ыңғай йоғонто яһамай.**

Ләкин, аҡса етмәй, аҡса юҡ, тип зарланып ултырыуҙан кеҫә ҡалынаймай. Ниндәйҙер юлын табырға, әмәлен эҙләргә кәрәк. Мин дәрестәрҙән һуң иҙән дә йыуҙым, бала ҡарауы ла булдым, почта йәшниктәренә реклама ла тараттым. Быларҙың барыһы ла эш хаҡына өҫтәмә булды, ләкин күңелгә оҡшаманы. Шуға күрә үҙемдең төп һөнәремде тулыһынса "эшкә егергә" булдым һәм репетиторлыҡ менән шөғөлләнә башланым. Ләкин был өлкәнең дә "һыу аҫты таштары" күп. Мәҫәлән, репетиторлыҡ менән күптәр шөғөлләнә, шуға күрә клиенттар табыуы ауыр. Шулай уҡ эштән һуң күп урынға өлгөрөп булмай, тимәк, иң күбе өс-дүрт кеше менән генә эшләргә тура килә. Үҙемә лә саҡыра алмайым, сөнки фатирҙа бергә йәшәгән ҡыҙҙарға ҡамасаулайым. Улар ҙа эш кешеһе, арыпталып ҡайтыуҙарына бер бүлмәле фатирға көн дә сит кеше йыйып ултырып булмай.

Тағы ла үҙ-үҙеңде һаҡлау инстикты ла бар бит әле. Белмәгән-күрмәгән йортҡа, таныш булмаған кеше янына барыуы ла ҡурҡыта. Шулай ҙа, уйлай торғас, алтын урталыҡты таптым. Яратҡан эшем менән дә булам, аҡса ла эшләйем. Нисек, тиһегеҙме? Репетиторлыҡ эшемдә заманса технологияны ҡулланам - сит телде скайп аша өйрәтәм. Минә лә уңайлы, сөнки ваҡыт сарыф итеп ҡайҙалыр йөрөргә кәрәкмәй, телде өйрәнгән кешегә лә һәйбәт, ул үҙенә уңайлы шарттарҙа шөғөлләнә. Бындай дәрестең бер сәғәте өсөн 300 һум аҡса алам. Уны интернет селтәрендәге махсус янсыҡҡа (Яндекс-кошелёк) йәки банк карточкаһына күсерәләр. Көнөнә дүрт-биш сәғәт шөғөлләнергә, тимәк, 1500 һум аҡса эшләргә була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн һәр кемдең компьютеры бар. Шуға күрә минең миҫалды ҡулланыусылар тағы ла булыр, тип уйлайым. Бындай юл менән сит телде өйрәнеүселәрҙе баш ҡалала ғына түгел, ә тотош республика буйынса табырға була. Әйткәндәй, бөгөн күптәр милли рухы уяныр, үҙ туған телен өйрәнеү тураһында хыялллана. Мәҫәлән, башҡорт телен дә скайп аша өйрәнергә йә телмәр шымартыу дәрестәре алырға була бит.**

**Әнүзә ӘХМӘТОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Сифатһыҙ хеҙмәтләндереү менән осрашҡан ваҡытта үҙегеҙҙең ҡулланыусы хоҡуҡтарын файҙалана беләһегеҙме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Булат ӘМИНЕВ, шәхси эшҡыуар:*** Сәсемде ҡырҡтырырға һәм сал ерҙәрен буятырға тип бөҙрәханаға барҙым. Башта уҡ оҫта күрһәтеләсәк хеҙмәттең хаҡын әйтте - 750 һум. Ләкин эш һуңында оҫта бөтөнләй икенсе, тәүге сумманан күпкә ҡыйбатыраҡ хаҡ һораны. Ни өсөн хаҡтың улай үҫеп китеүе хаҡында һорағас, ул минә сәсемдең бик насар торошта булыуын һәм шуға күрә ул профессиональ дауалау курсы уҙғарыуы хаҡында әйтте. Минән һорамайынса, тимәк, сәстәрем менән әллә низәр ҡыландырып ташлаған. Былай булһа, бөҙрәханаларҙан бөтөнләй ялтас сығыуың да бар, тип уйланым да, үҙ гүмеремдә беренсе тапҡыр ҡулланыусы хоҡуғымды яҡларға булдым. Белеүемсә, алдан һөйләшеп килешелмәгән процедуралар өсөн, хатта клиент өсөн мөһим булған осраҡта ла, бөҙрәхана, матурлыҡ салоны, теш дауалау клиникаларында мөрәжәғәт итеүсенең түләмәҫкә тулы хоҡуғы бар. Был хаҡта "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында"ғы закондың 33-сө статьяһында (2-се пункт) бик асыҡ әйтелгән. Шуға күрә минә күрһәтелгән хеҙмәттәр хаҡында пунктлап яҙылған иҫәп-хисап (счет) биреүҙәрен талап иттем һәм үҙем заказ бирмәгән процедураларҙың булыуын күрһәтеп, яны хаҡ буйынса түләүҙән баш тарттым да, 750 һумымды сығарып һалдым. Бөҙрәхана хеҙмәткәрҙәренең полиция саҡырыуы менән янауҙарына иҫем дә китмәне, сөнки улар граждандлыҡ-хоҡуҡи мөнәсәбәттәрҙе көйләүсе орган түгел. Үҙ сиратымда, бөҙрәхана етәкселегенә, әгәр ҙә үҙҙәренең хаҡлы булыуҙарына ныҡ ышанһалар, судҡа мөрәжәғәт итергә кәңәш биреп сығып киттем. Былна бит ул үҙ хоҡуҡтарыңды белеү һәм уларҙы яҡлау. Барыһы ла ошолай итһә, иҫкергән аҙыҡ-түлек һатыу йәки сифатһыҙ хеҙмәтләндереү күренештәре булмаҫ ине.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Иылайыр районының башҡорт теле уҡытыусылары менән осрашыуҙа.

**1 февралдән 31 мартҡа тиклем тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән, йәғни 384 һум 36 тингә, 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2014 йылдың икенсе яртыһына яҙыла алаһығыҙ.**

Былтыр 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн баҫмабыҙға яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр ай һайын беҙҙең бүләктәребеҙгә - ҡыҙыҡлы китаптарға лайыҡ булды. Был дәртләндереү сараһын әле лә дауам итәбеҙ. Мартта 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән **2 уҡыусыбыҙ - "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 2 уҡыусыбыҙ - "История башкирского народа", 10 уҡыусыбыҙ башҡортса "Дини календарь", 5 уҡыусыбыҙ Мәрйәм Буракаеваның "Көҙгө ысыҡ" китаптарын алып ҡыуанлыр.**

Ә инде эргә-тирәгеҙҙә "Киске Өфө"гә йылдың тәүге яртыһына яҙылырға онотҡан, өлгөрмәгән кешеләр булһа, уларға ошо һүҙҙәребеҙҙе тапшырығыҙ: гәзитебеҙгә 17 мартҡа тиклем яҙылғандар уны апрелдән алдыра башлаясаҡ.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: "Киске Өфө" гәзитенә республиканың һәр районында, ҡалаһында, ауылында яҙылып була.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Халыҡ иҫәбе буйынса Башҡортостан хәҙер Волга буйы федераль округында - беренсе һәм тотош ил буйынса етенсе урында тора. "Беҙ округтың иң йәш төбәге. Республика халҡының уртаса йәше 38 йәш. Рәсәйҙә ул 39,2-гә тиң, Волга буйы федераль округында - 39,5. Кеше ресурстары өлкәһендә беҙҙә иң яҡшы потенциал. Әммә иҡтисади әүҙем халыҡ өлөшө Башҡортостанда ни бары 67 процент, йәғни өстән ике өлөшөн тәшкил итә. Был күрһәткес буйынса Волга буйы федераль округында беҙ 12 урынды биләйбеҙ", - тип билдәләне республика Президенты БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығына инвалидтар өсөн реабилитациялау сертификаттары индерергә ҡушты. "Кыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөн беҙ бөтә инвалидтарҙы ла сифатлы реабилитациялау хеҙмәттәре менән тәьмин итә алмайбыҙ. Был өлкәнең күп кенә учреждениелары санитар ҙа, янгынға ҡаршы ла талаптарға яуап бирмәй, уларҙың кәрәкле ҡорамалдары ла юҡ", - тине республика башлығы.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығына мохтаж ғаиләләргә социаль контракт нигеҙендә ярҙам итеүҙең яңы формаһын индереүҙе тәьмин итергә ҡушты. "Йыл һайын халыҡҡа социаль яҡлау сараларына 11 миллиард һумдан ашыу, йәғни республика бюджетының 13 проценты йүнәлтелә. Пособиеларҙы уларға ысынлап та мохтаж булғандар алырға тейеш", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Хәмитов.

✓Әлеге ваҡытта Башҡортостандың өстән бер өлөш халҡы - өлкән йәштәге кешеләр һәм балалар, йәғни төрлө формаларҙа төп социаль ярҙам алыусылар. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, республикала дөйөм эшһеҙлек кимәле 5,8 процент тәшкил итә. Был күрһәткес буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында 12-се урынды биләй. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәткәрҙәргә ихтыяж 2000 йылдан алып 9 мендән 31 мең кешегә тиклем, йәғни 3,5 тапҡырға үҫкән.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЛАЛАРЫҒЫҘ...

## һуҡыр, һаңғырау, аҡылһыҙ түгел

**Баныу ҠАҺАРМАНОВА, журналист:** Ямғырлы, һалҡын елле көҙгө йонсоу көн ине. Бер ҡулына ауыр пакет тотҡан, фырт кейенгән йәш ҡатын балаһын коляскаға ултыртып, ашығып ҡайтып килә (балалар баҡсаһынан, ахыры). Светофорҙа йәшел ут ҡабынғас, юл аша шәп-шәп атлап сыҡҡанда, ҡыҙыҡайы артына боролобораҡ ултырҙы ла: "Әсәкәйем, ҙурайғас, мин һине үҙем коляскаға ултыртып алып йөрөтөрмөн, йәме", - тине. Кескәй баланың изге һүҙҙәренән һуң күҙ алдында көн яҡтырып киткәндәй булды. Әммә әсәһе ҡырҡыу тауышы менән тағы көндө ҡарайтып ҡуйҙы: "Борғоланма, тик кенә ултыр, иҫәр!"

Ярты йыллап ваҡыт уҙҙы бит инде, әммә ошо күренеште бер ҙә онота алмайым. Тағы ла бер ваҡиға хәтерҙә өйкәп тик тора: район учреждениеларының береһенә йомош менән ингәйнем. Йәш әсә ҡысҡырып-ҡыҙып һинеҙ-ун йәшлек ҡыҙын әрләй: "Ерҙе тештәрең менән кимерһәң кимер, әммә телефоныңды тап! Ишеттеңме!" Бахыр бала күҙ йәштәренә күмелеп, ауыр портфеле аҫтында ҡарт әбей кеүек бөксәңләп сығып китте. "Нишләп улай балағыҙҙы яҙалайһығыҙ?", - тип һүҙ ҡушҡас, ҡатын туҙынып, ҡырт киҫте: "Ҡыҫылмағыҙ! Минең балам, нисек теләйем, шулай тәрбиәләйем!" Ҡара ҡайғыға батҡан ҡыҙыҡайҙың артынан ҡыуып етеп, уны хәлдән килгәнсе йыуатырға ине, тик өлгөрмәнем. Һуңынан төшөмдә, шул баланың телефонын кемдер табып, йыйыштырыусыға биреп киткән, тип күрҙем. Ҡыуанған ҡыҙыҡай сумкаһын көскә һөйрәп, кәлтер-көлтөр кире әсәһенең эш урынына йүгергән, имеш. Телефонды тапҡанын белгәс, йәш ҡатындың еңеүле ҡиәфәттә йылмайғанын күҙ алдына килтереп, ытырғаныс тойғо киҫереп уянғайным...

Нимә өсөн һөйләйемме быларҙы? Күп ата-әсә бала тәрбиәләй белмәй, тип әйтергә теләүем. Миҫалға килтерелгән был ике йәш ҡатын да, иманым камил, юғары белемлелер, үҙҙәрен интеллигент, зауыҡлы кеше итеп иҫәпләйҙер, күптәргә өҫтән аҫҡа, танау буйынан ғына ҡарайҙыр. Ләкин юғары мәҙәнилек белемлелектә генә түгел, ә башҡа кешене, шул иҫәптән үҙ баланды аңлауҙа, күңел матурлығында, йәғни мәрхәмәтлектә, сабырлыҡта...

Ҙурайғас түгел, бала саҡта шәхескә нигеҙ һалына, яҙмыштың тәүге хәрефтәре яҙыла. Һәм ул хәреф-баҫҡыстар тик "уңыш", "бәхет", "ҡыуаныс" тигән үрҙәргә илтһен өсөн тәү сиратта ата-әсәләрҙе тәрбиәләү кәрәк. Гел ҡайҙалыр ашыҡҡан, йәмғиәт талаптарына яраҡлашырға тырышып, түҙемлек ептәре өҙөләр сиккә етеп тартылған, һәр һаҡһыҙ һүҙҙән, ҡырын ҡараштан бомба кеүек шартларға әҙер йөрөгән ата-әсә бала тәрбиәләгәндә төп шартты күҙ уңынан ысҡындыра - үҙҙәре бәхетле була, үҙ-ара дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡора белмәй. Тик тормошта үҙ урынын тапҡан, эшенән ҡыуаныс алған, бер-береһен һөйгән, ихтирам иткән ата-әсә генә бәхетле, йәғни бөтөн күңелле балалар тәрбиәләй. Башҡалар өсөн асыуын быҫраҡ йыуынты итеп яҡлауһыҙ кескәйҙәргә ауҙармай, үҙенең уңышһыҙлығы өсөн уларҙы яуапҡа тарттырмай, эш боҙған бесәйҙе быҫрағына мороно менән төрткән кеүек, балаларын аҙ ғына яңылышлыҡ өсөн дә бөтөрөп ташлап, үҙенең өҫтөнлөгөн раҫлап тормай.

Ғаилә - йылы усаҡ, тип һөйләргә күнеккәнбеҙ. Әммә һуңғы йылдарҙа йыш ҡына ғаилә бер йорт масштабындағы һуғыш аренаһына әйләнә. Ир менән ҡатын аҫтыртын агенттар, өндәшмәҫ партизандар, хатта тәрилкәләр, сәнске-бысаҡтар менән ҡара-ҡаршы алышҡан гладиаторҙар ҙа булып китә. Ә балалар тамашаһы, ситтән күҙәтеүсе генә ролендә ҡалмай, ике фронт-уттың эсендә ҡайнашырға мәжбүр. "Һинең эскесе атайың тағы бар аҡсаны эсеп бөтөргән!", "Һинең кәнтәй әсәң тағы ҡайҙа һәптәнләп сығып китте?", "Йүнһеҙ атаңа оҡшап..." - ошондай һүҙҙәр-уҡтар бала йөрәген йәҙрә кеүек аҡтарып, яралай. Атаһының, әсәһенең кәмселектәре өсөн оло ғәйеп тойғоһо уларҙың иңдәренә ауыр йөк булып ята. Ваҡыт уҙа килә һәр яралы күңел ҡанһырауҙан туҡтай, әммә эҙ-төйөндәре ҡалып, ғүмер буйы үҙен белдертеп тора, бәхетле йәшәргә ҡамасаулай.

Ҡырыҫ, ҡаты булғаныбыҙға беҙ ғәйепле түгел, тип күптәр йәмғиәткә, ата-әсәһенә һылтай. Ләкин камиллыҡҡа ынтылырға, үҙгәрергә һис бер ҡасан һуң түгел. Үҙегеҙ кәртәләр, ҡоршауҙар эсендә үҫһәгеҙ ҙә, ата-әсәйегеҙҙең хаталарын ҡабатламай, балаларығыҙҙы бәхетле итеү сараһын күрегеҙ, тип әйткем килә ундайҙарға. Балаҡайығыҙ ҡамыр кеүек йомшаҡ сағында. Йөрәктәрен таш итеп ҡатырһағыҙ ҙа ғәфү үтенергә һуң түгел. Кеше тере саҡта хаталарҙы төҙәтергә мөмкин ул, теләк кенә булһын. Аңлашып, яратыпяратылып йәшәүгә ни етә?

Тормош - тигеҙ генә юл түгел, һәр кемдең хаталаныуы ихтимал. Шул хаталарҙы танып, ғәфү үтенә белеү - батырлыҡ һәм аҡыл, юғары мәҙәнилек күрһәткесе, минеңсә. Көсһөҙлөк түгел. Айырыуса бала алдында ғәйепле булһағыҙ, ғәйебегеҙҙе танығыҙ, кисереү һорағыҙ. Балалар һуҡыр, һаңғырау, аҡылһыҙ түгел. Бала кеше мәрхәмәтле, киң күңелле ул, ғәфү итер һәм артабан яҡты, бөтөн күңел менән үҫер.

ШАНДАУ

# ҮҘ ТЕЛЕБЕҘҘӘ ҺӨЙЛӘШЕҮҘӘН ТҮГЕЛ,



## ә үҙ телебеҙҙә һөйләшә белмәүҙән ояლайыҡ!

**Гәзитебеҙҙең 8-се һанында Мәрйәм апай Бураҡаеваның "Ысын мәҙәнилекте кем нисек аңлай?" тигән мәҡәләһен уҡығас, мин дә ошо темаға ҡағылышлы фекерҙәремде еткерергә булдым.**

Иң элек Мәрйәм апайға фәһемле кәңәштәре, насар күренештәргә битараф ҡала алмаған оло йөрәге, башҡортса сыҡҡан бөтә баҫмаларҙа ла сығыш яһап, милләтебеҙҙе изгелеккә өндәүе, һайыҡмаҫ күңел хазинаһы өсөн рәхмәтемде еткереп үтәм.

Урынлы борсола ил инәһе. Башҡорт телендә башҡорттар үҙҙәре һөйләшмәгәс, кем һөйләшһен һуң? Ғәйеп үҙебеҙҙә. Беҙҙе бит башҡортса аралашыуҙан бер кем дә тыймай. Үҙ теләге менән туған теленән, мәҙәниәтенән баш тартҡандар бихисап булып китте бит. Беҙҙең Хәйбулла районында йәшәгән халыҡтың 70 проценттан артығырағын башҡорттар тәшкил итә, ә үҙ телебеҙҙә сыҡҡан район гәзитен тик 1804 кеше генә алдыра, урыҫсаһы 4181 тирәһе тираж менән сыға. Һығымтаны үҙегеҙ яһағыҙ инде.

Ырымбур өлкәһенең Красногвардейск районына ҡараған Плешановка ауылында ҙур мәжлестә булырға тура килде. Алтмыш йәшлек юбилярҙы ҡотларға килгән туғандары, коллегалары, дуҫ-иштәре, ҡоҙа-ҡоҙасалары башҡортса аралашып, тик башҡортса йырлашып күңел астылар. Ҡотлауҙар ҙа саф үҙ телебеҙҙә генә еткерелде, яңылыш ҡына бер русса һүҙ ҡыҫтырһаларсы! Етмештән ашыу халыҡ араһында әллә урыҫса белгән бер кеше лә булманы инде? Табынға йыйылыусыларҙың балалары, ейәндәре менән дә туған телдә аралашыуҙары ғәжәпләндерҙе. Һоҡландым, хайран ҡалдым, улар бит урыҫ мөхитендә йәшәйҙәр, эшләйҙәр, уҡыйҙар. Ә беҙҙә?

Интернетта башҡорт Википедияһында ойошторолған "Һөйгәненә кем тип өндәшәһең?" конкурсына ҡарата шуларҙы әйтер инем: беҙҙең башҡорт халҡы, ысынлап та, тойғоларын тышҡа сығарып бармай, динебеҙ ҙә тыйнаҡлыҡты, сабырлыҡты хуплай. Улдарын әрмегә, ҡыҙҙарын кейәүгә оҙатҡанда, яҡындарын ерләгәндә лә өнһөҙ генә илай башҡорт ҡатындары. Ә инде туйҙарҙа, халыҡ алдында хаяһыҙ ҡыланыуҙарҙы, әпәкәй-сүпәкәйҙәрҙе күпселек хупламайҙыр. Шулай ҙа әйтһендәр егеттәребеҙ ҡыҙҙарға наҙлы һүҙҙәрен, әйтергә өйрәнһендәр. Ир-ат - күҙҙәре менән, ҡатын-ҡыҙ ҡолағы менән ярата, тип әйтәләр бит. Юҡҡа ғынамы ни, татлы телдәренә, "дорогая, милая"һына алданып, ситяттарға кәләш була һылыуҙарыбыҙ! Шуның өсөн генә булһа ла хуплайыҡ, әйҙә, быныһын да: ишетһендәр ҡыҙҙарыбыҙ һөйөү һүҙҙәрен үҙ туған телендә, тик улар минут һайын ҡабатланған "я люблю тебя" кеүек дежур һүҙҙәргә әйләнмәй, ихлас күңелдән, йөҙөндә лә, күҙҙәрендә лә сағылдырып әйтелһен. Ул һүҙҙәр аулаҡта ғына әйтелһә, уның баһаһы тағы ла ҙур булыр.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы - үҙ телебеҙҙә һөйләшеүҙән түгел, һөйләшә белмәүҙән оялһын үҫеп килеүсе быуын. Заманса йәшәйбеҙ, тип, үҙ асылыбыҙҙы юғалтмайыҡ, милләтебеҙгә лайыҡлы булайыҡ. Мәҙәни халыҡ булайыҡ. Минеңсә лә ысын мәҙәнилек, Мәрйәм апай Бураҡаева әйткәнсә, "туған телдә уйлап, фекер йөрөтөп, ижад итеп һәм милләттәштәрең менән фәҡәт туған телеңдә аралашып, үҙ халҡыңдың мәҙәниәтен, тарихын яҡшы белеп һәм халҡың менән ғорурланып, халҡыңдың йыр-моңон күңелеңә һеңдереп, тыуған ереңде, илеңде ғәзиз әсәйеңдәй күреп, халҡыңдың рухы, маҡсаты, уй-хыялдары, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәү ул". Ә был ҡағиҙәләрҙең барыһы ла ғаиләлә атҡарыла. Бына ни өсөн мөһим ҡыҙҙарыбыҙҙың матур һүҙҙәргә алданып, сит-яттарҙы йәр итмәүе. Ошоно уҡ сит милләт ҡыҙҙарын үҙ итергә ашҡынып торған егеттәребеҙгә ҡарата ла әйтергә була. Үҙебеҙ булып, үҙ асылыбыҙҙа йәшәйек, милләттәштәр.

**Фәриға КҮСӘКОВА.**
**Хәйбулла районы Таштуғай ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Хөкүмәте Торлаҡ төҙөлөшө үҫешенә булышлыҡ итеү федераль фондының ер участкаларында төҙөлгән йәки төҙөлә башлаған экономкласс торлағын һатып алыуға хоҡуғы булған граждандар исемлеген формалаштырыу өсөн документ формаларын раҫланы. Ҡарар менән ғариза биреү формаһы, шулай уҡ уға беркетелгән документтар исемлеге раҫланды, атап әйткәндә улар: граждандың шәхси мәғлүмәттәрен эшкәртеүгә ризалыҡ биреү; ғариза алыуға расписка; ғаризаларҙы теркәү китабы формаһы, шулай уҡ уны алып барыу тәртибе.

✓ Рөстәм Хәмитов 2013 йыл өсөн продукция (тауар, хеҙмәт) сифаты өлкәһендә Башҡортостан Президенты премияларын биреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Премия алыусылар исемлегендә БР Нефть-химия эшкәртеү институты, Нефтекама автомобилдәр заводы, Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы, "Красноусол" шифаханаһы, Ишембай нефть колледжы, Башҡортостан медицина колледжы һәм Өфө ҡалаһының 49-сы поликлиникаһы бар.

✓ Быйыл республикала Төбәк ҡан тамырҙары үҙәктәре селтәренә тағы бер үҙәк өҫтәләсәк. Уны Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Октябрьский ҡалаһында асырға ниәтләнә. Былтырҙан алып Төбәк ҡан тамырҙары үҙәге Стәрлетамаҡта, Өфөнөң 21-се, 22-се дауаханаларында һәм кардиологик диспансерҙа эшләй. 2018 йылға бындай үҙәктәр республиканың бөтә территорияһында буласаҡ, тип планлаштыра министрлыҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда халыҡтың үлеме сәбәптәре структураһында беренсе урында нәҡ ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары тора.

✓ Башҡортостан ҡалаларында, муниципаль райондарында 2014 йылдың беренсе кварталына дөйөм торлаҡ майҙанының бер квадрат метрына уртаса баҙар хаҡы күрһәткестәре раҫланған. Ҡалаларҙа торлаҡ "квадратының" баҙар хаҡы 23 600 һумдан алып (Ағиҙел һәм Межгорье) 32 395 һумға тиклем (Өфө) үҙгәрә, ҡала биләмәләрендә - 28 меңдән алып (Дәүләкән) 31 мең һумға тиклем (Белорет һәм Учалы), муниципаль райондарҙа - 23 600 алып (Белорет, Благовещен, Дәүләкән, Ишембай, Мәләүез һәм Учалы райондары) 32 меңгә тиклем (Өфө районы). Раҫланған күрһәткестәр торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждарға субсидиялар күләмен иҫәпләгәндә файҙаланыла.

**“Башинформ”дан.**

*✓ Баш ҡаланың дөйөм белем биреү мәктәптәрендә өсөнсө йыл инде "Мәктәп картаһы" эшләй. Йәғни балалар махсус карталар ҡуллана һәм ашау өсөн ҡулаҡса менән түгел, карта аша иҫәпләшә.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# МӘКТӘПТӘ ТУҠЛАНЫУ...

## шулай уҡ иғтибар үҙәгендә

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең Сауҙа һәм хеҙмәт күрһәтеүҙәрҙе көйләү идаралығы начальнигы Ирина Рублева билдәләүенсә, баш ҡаланың дөйөм туҡланыу структураһында мәктәп туҡланыуы айырым урын алып тора һәм һәр саҡ етәкселектең күҙ уңында.**

Һуңғы өс йылда мәктәп уҡыусыларының туҡланыуын ойоштороуға бүленгән аҡса 97 миллиондан 144 миллионғаса артҡан. Белем биреү усаҡтарының инженер коммуникацияларын һәм аҙыҡ-түлек блоктарын капиталь ремонтлауға 250 миллион һум аҡса йүнәлтелгән.

Балансла, һаулыҡ өсөн кәрәкле калориялағы витаминдар һәм микроэлементтар тупланған ризыҡтан торған меню 10 көнгә алдан төҙөлә һәм Роспотребнадзор органдары тарафынан раҫлана. Әммә уҡыусылар араһындағы һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, уҡыусылар, бигерәк тә өлкән синыф уҡыусылары, иртәнге йәки төшкө аш комплексында ризыҡтарҙы һайлау мөмкинлеге булыуын теләй. Был мәсьәләне хәл итеү йүнәлешендә Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалалары тәжрибәһен өйрәнеү буйынса эш төркөмө булдырылған. Әлеге ваҡытта тәжрибә рәүешендә өҫтәмә бар-буфеттар асылған. Уларҙа продукцияның 10 проценты - һуттар, һыуҙар, 30 проценты кондитер һәм ҡамыр ризыҡтарынан тора. 60 процентан күберәген салаттар, йылы аш тәшкил итә.

Совет районында урынлашҡан 110-сы мәктәптә ҡулланылған алым әлегә иң яҡшыһы булып тора: унда башланғыс синыф уҡыусыларының иртәнге һәм төшкө аштың дүрт төр араһынан үҙҙәренә оҡшағанын һайлау мөмкинлеге бар, йәғни һәр синыф алдағы аҙнаға үҙҙәренә туҡланыуҙы алдан аныҡлап ҡуя; өлкән синыф уҡыусылары иһә комплекслы иртәнге һәм төшкө ашҡа әҙер ризыҡтарҙы үҙҙәре һайлап ала, йәғни улар үҙ-үҙҙәрен хеҙмәтләндерә. Һөҙөмтәлә балалар ҙа, ата-әсәләр ҙә, педагогик состав та ҡәнәғәт, аш-һыу артып ҡалып түгелмәй, мәктәптә туҡланырға теләүселәр һаны 10 процентҡа артҡан. Бынан тыш, мәктәпкә өс термоарба һатып алынған. Улар һәр ҡайһыһы 36 блюдоға иҫәпләнгән 6 контейнерҙан тора. Был арбалар уҡыусылар өҫтәл артына ултырғас ҡына килтерелә. Балалар тәүҙә өҫтәлгә ҡуйылған салаттарҙы ашай, һуңынан ғына йылы аш ейә.

Баш ҡаланың дөйөм белем биреү мәктәптәрендә өсөнсө йыл инде "Мәктәп картаһы" эшләй. Йәғни балалар махсус карталар ҡуллана һәм ашау өсөн ҡулаҡса менән түгел, карта аша иҫәпләшә. Ата-әсәләр картала күпме аҡса ҡалғанын, балаһы нимә ашағанын контролдә тота. Бөгөн Киров районының 16 мәктәбе ошо ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшеүгә күскән. 1 марттан Совет районының барлыҡ мәктәптәре лә ошо программа буйынса эшләй башланы.

*О, СПОРТ!*

# БАШҠОРТОСТАН БИАТЛОНСЫЛАРЫ...

## Паралимпияла ике алтын миҙал яуланы



**7 мартта Сочи ҡалаһында башланған XI ҡышҡы Паралимпия уйындарында Рәсәй йыйылма командаһы (16 алтын, 18 көмөш, 13 бронза, бөтәһе - 47) миҙалдар һаны буйынса тәүгә баҫҡыста килә. Икенсе урында - алты алтын миҙал менән Германия спортсылары.**

Башҡортостан спортсылары ла уңышлы сығыштары менән ҡыуандыра. Рәсәй йыйылма командаһы биатлонсылары Азат Ҡарасурин һәм Кирилл Михайлов - ике алтын, Ирек Зарипов - бер көмөш һәм Андрей Давидович бер бронза миҙал килтерҙе. Уйындарҙа республиканың данын йәмғеһе 5 спортсы - Ирек Зарипов, Азат Ҡарасурин, Кирилл Михайлов, Надежда Андреева һәм Андрей Давидович яҡлай. Әйткәндәй, Ҡышҡы Паралимпия уйындары тарихында Башҡортостан спортсылары 27 миҙал (14 алтын, 11 көмөш, 2 бронза миҙалдар) яулаған. Паралимпиадала миҙал яулаған спортсыларҙы республика Хөкүмәте аҡсалата премия менән бүләкләргә вәғәҙә иткәйне. Алтын миҙал өсөн - 1,5 миллион, көмөш өсөн - бер миллион һәм бронза өсөн 500 мең һум ҡаралған.

Шишмә районы Ҡалмаш ауылы егете, Бәләбәй Башҡорт гимназияһын тамамлаған Азат Ҡарасурин 2011 йылда Сыктывкарҙа үткән саңғы буйынса Рәсәй беренселегендә чемпион һәм Рәсәй Федерацияһының спорт мастеры, ә тағы бер айҙан Ханты-Мансийскиҙа үткән биатлон һәм саңғы ярыштары буйынса донъя чемпионатында көмөш миҙал яулап, халыҡ-ара спорт мастеры исеменә лайыҡ булғайны. Бөгөн Азат Сочиҙа 12,5 саҡрымға биатлон ярышында "баҫып ярышыу" категорияһында еңеп, үҙен донъялағы иң көслө биатлонсы итеп танытты.

Был еңеүе менән уны Рәсәй Федерацияһы Президенты В.В. Путин, Башҡортостан Президенты Р.З. Хәмитов ҡотланы.

- Бөтә республикаға ҙур рәхмәт! Мин артабан да ҡуйылған маҡсатарға ирешәсәкмен, - тине чемпион.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЙӘШЕЛСӘ ҠИММӘТЛӘНДЕ

**Башҡортостанда аҙыҡ-түлек тауарҙары йыл башынан алып 2,6 процентҡа ҡиммәтләнгән. Күбеһенсә йәшелсәләргә хаҡ артҡан, тип хәбәр итә Башҡортостанстат.**

Бына шулай, картуф хаҡы ғинуар-февралдә 30,1 процентҡа тиерлек, кәбеҫтә һәм һуған - 1,4, ҡыяр, кишер, сөгөлдөр 1,2 тапҡырға ҡиммәтләнгән. Статистика күҙәтеүе алып барылған йәшелсәләрҙән февралдә помидорға ғына 9,2 процентҡа хаҡ төшкән.

Һөт, эремсек һәм шәкәр ҡомо хаҡы үткән айҙа - 1,2-2,8, араҡы 2,7 процентҡа артҡан. Шул уҡ ваҡытта ҡош ите, сусҡа ите, бойҙай оно, макарон ризығы, көнбағыш майы, тауыҡ йоморкалары, киреһенсә, 1,1-5,5 процентҡа арзанайған.

Хеҙмәттәр секторында эҫе һыу менән тәьмин итеүгә хаҡтың 12,8 процентҡа артыуы билдәләнә. Йолалар хеҙмәтенең айырым төрҙәре лә 12,7 процентҡа ҡиммәтләнгән.

Башҡортостанда инфляция февралдә 0,6 процент тәшкил иткән, йыл башынан алып - 1,4 процент.

*ХОККЕЙ*

# ИҪӘП ТИГЕҘЛӘШТЕ

**Континенталь хоккей лигаһының плей-офф уйындары, һәр ваҡыттағыса, көйәрмәндәрҙең иғтибары үҙәгендә. Хоккей миҙгеленең иң көтөп алынған финал уйындарына көс һынашырға, һәр ваҡыттағыса, 16 команда сыкты. "Салауат Юлаев" финал уйындарын Түбәнге Новгородтың "Торпедо" командаһы менән осрашыуҙан башланы. КХЛ-дың иң көслө командалары иҫәбендә булған "Салауат Юлаев" һәм "Торпедо" әлегә тиклем бер тапҡыр ҙа плей-оффта бер-береһенә ҡаршы сыҡҡаны булманы.**

Өфөлә уҙған тәүге ике осрашыуҙа ҡунаҡтар уйын дилбегәһен баштан уҡ үҙ ҡулдарына алып, "Салауат Юлаев" командаһы көйәрмәндәрен утҡа һалып, еңеү яуланы. Шулай итеп, серияла иҫәп "Торпедо" файҙаһына 2:0 булды. Ҡағиҙә буйынса, командалар дүрт еңеүгә тиклем осрашырға тейеш. Шуға күрә көйәрмәндәр киләһе уйынға Түбәнге Новгородҡа юлланған юлаевсыларҙан яҡшы, һөҙөмтәле уйын һәм тик еңеү көттө. Һәм Өфө уйынсылары һынатманы. Ике уйында ла юлаевсылар хужаларға ҡарағанда етеҙерәк һәм оҫтараҡ булып сыкты. Хоккей яратыусыларҙың хәтерендә бигерәк тә өсөнсө осрашыу оҙаҡ һаҡланасаҡ. 114 минут, йәғни 6 осор, дауам иткән көсөргәнешле матч уйын дауамлылығы буйынса КХЛ-дың рекорд һандарына саҡ ҡына етмәй ҡалды (118 минут 48 секунд).

Серияла иҫәпте 1:2 итеү "Салауат Юлаев"ҡа дүртенсе уйынды яҡшы кәйефтә һәм үҙ көсөнә ныҡлы ышаныста башларға ярҙам итте. Хужаларҙың юғары тиҙлек менән уйнауҙарына һәм әленән-әле Андрей Василевский ҡапҡаһы эргәһендә ҡойон уйнатыуына ҡарамаҫтан, дүртенсе осрашыу ҙа өфөләләр файҙаһына тамамланды. Шулай итеп, сериялағы иҫәп тигеҙләште. Уйын тағы ла Өфөгә ҡусте. Юлаевсыларҙың артабан да уйын ҡомарын һүндермәйенсә, көйәрмәндәргә еңеү шатлығын кисереү мөмкинлеге биреренә ышанайыҡ.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты үҙенең 70 йыллыҡ юбилейына арнап, гимназия, уның уҡытыусылары, тәрбиәселәре һәм сығарылыш уҡыусылары тураһында энциклопедия әҙерләй. Әле баҫмаға уҡыу йортон тамамлаған 500-ләп кенә уҡыусы тураһында мәғлүмәт тупланған. Бигерәк тә гимназияны 50-60-сы йылдарҙа тамамлаған уҡыусылар тураһында мәғлүмәттәр аҙ. Шуға ла 1 июнгә тиклем элекке уҡыусыларҙан, эшләп киткән ветерандарҙан мәғлүмәттәр көтә гимназия ла, "Башҡортостан энциклопедияһы" нәшриәте лә.

✓Быйыл 28-30 майҙа Өфөлә 17-се тапҡыр төрки йәштәренең Халыҡ-ара "Урал моңо" конкурс-фестивале үткәреләсәк. Сарала 18-35 йәштәге йырсылар йәки эстрада коллективтары ҡатнаша ала. Һайлап алыу өс турҙа ойоштороласаҡ. Башҡортостан йырсылары өсөн һайлап алыу туры 27 мартта Өфө ҡалаһында үтә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 289-62-00. Ғариза положениеһын һәм формаһын *www.rcntrb.ru.* сайтында таба алаһығыҙ.

✓Өфө Рәсәйҙең иң мөләйем ҡалалары исемлегенә ингән. *Jetpac.com* порталы белгестәре махсус ҡушымта ярҙамы менән *Instagram* социаль селтәрендәге фотоларҙы анализлаған. Өфө 65 өйрәнелгән ҡала исемлегендә 27-се булып тора. Рәсәйҙең иң "мөләйем" ҡалаһы тип Саранск танылған. Икенсе урында Липецк, өсөнсөлә Яр Саллы тора. Мәскәү был исемлектә 63 урынды биләй.

✓Башҡортостандың Көйөргәҙе районында марал (эре Себер болаһы), ала-сыбар болан һәм йәйғорло бағыр үрсетеү буйынса ферма эшләй. Бында хәҙер 14 марал һәм 12 ала-сыбар болан бар, яңыраҡ тәүге үрсем булды. 2014 йылдың аҙағына тиклем хайуандарҙың иҫәбен 500 башҡа тиклем арттырыу планлаштырыла. Бер нисә йылдан үрсетеүселәр тәүге панттар - боландарҙың йәш мөгөҙҙәрен алырға иҫәп тота. Предприятиеның продукцияһын Ҡытайҙа һәм Кореяла һатыу планлаштырыла. Инвестор әйтеүенсә, панттарҙан дарыуҙарҙы Рәсәйҙә лә эшләй башланылар, шуға күрә Рәсәй етештереүселәренә лә сеймал һатыласаҡ. Маралдарҙан һәм боландарҙан тыш, хужалыҡта балыҡ үрсетәләр. Бында һөмбаш һәм йәйғорло бағырҙар үрсетеү өсөн ябыҡ бассейн бар.

СӘЙӘСӘТ

**Бөгөн бар донъя йәмәғәтселегенең иғтибары Украинаға төбәлгән. Хатта ошо фонда Ҡышҡы Олимпия һәм Паралимпия уйындары ла, нисектер, икенсе планға күскәндәй булды. Бары тик Украинаның биатлонсы ҡатын-ҡыҙҙарының эстафеталағы триумфаль еңеүе генә: "Беҙ көрәшәсәкбеҙ әле!" - тигәнгә ишара һымаҡ ҡабул ителде.**

# СЦЕНАРИЙ БЕР ҮК...

## актерҙар ғына башҡа



Эйе, Украинала хәлдәр ҡатмарлы, әммә уны бер дәүләт проблемаһы ғына тип ҡарарға ярамай. Тарихтан мәғлүм булыуынса, бөйөк держава булған Рәсәйҙе нисәмә быуаттар буйына бер генә дошман да яулай алмай. Әммә һөжүм бер туҡтамай дауам итә. Уның алымдары быуаттар дауамында алышынып торһа ла, маҡсат бер - Рәсәйҙе нисек тә булһа тарҡатырға, көсһеҙләндерергә. Бөгөн Украинала барған ваҡиғалар ағышында ла Германияның беренсе канцлеры Отто фон Бисмарктың абруйлы фекере көнүҙәк булып ҡала: "Рәсәйҙең ҡеүәте, - ти ул, - унан Украинаның айырылыуы менән генә бөтөргә мөмкин... Украинаны Рәсәйҙән айырырға ғына түгел, уларҙы - бер халыҡтың ике өлөшөн - бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ҡуйырға һәм туған-туғанды үлтергәнен күҙәтергә кәрәк. Бының өсөн бары тик милли элита араһында һатлыҡ йәндәрҙе табырға һәм артабан үрсетергә, улар ярҙамында бөйөк халыҡтың бер өлөшөнөң үҙаңын шундай кимәлгә еткәнсе үҫтерергә кәрәк, ул рустыҡы булған бөтөн нәмәне, үҙенең ырыуын, аңын-тоҡон уйламайынса, күрә алмай башлаясаҡ. Ҡалғаны инде - ваҡыт эше".

Бынан 8 йыл элек - 2006 йылдың 11 мартында "демократик төрмә"лә вафат булған Югославия президенты Слободан Милошевичтың һуңғы интервьюһы бөгөн бигерәк тә актуаль һымаҡ. Украиналағы ваҡиғаларҙы йылдар призмаһы аша ҡарағанда, Милошевичтың фараздары, алдан күреүсәнлеге украин халҡы өсөн набат булып яңғырағанлығына инанаһың. Әммә уны ишетеүсе генә булмаған. Бөгөн интернет селтәрендә урын алған ошо интервью һәм Милошевичтың яҙмышы - Көнбайыштың һүҙенә, уның алдаштырыуҙарына мөкиббән китеп ышаныусыларға һабаҡ булып тора: "Рустар! Мин әле барлыҡ рустарға мөрәжәғәт итәм, - ти Слободан Милошевич. - Балканда Украина һәм Беларусь халҡын рустарға индерәләр. Беҙгә ҡарағыҙ һәм иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ: саҡ ҡына йомшаҡлыҡ күрһәтеп, бүлгеләнһәгеҙ, һеҙҙе лә беҙҙең яҙмыш көтә. Көнбайыш - ҡоторған эт кеүек һеҙҙең боғаҙығыҙға йәбешәсәк. Туғандар, Югославия яҙмышын онотмағыҙ! Үҙегеҙ менән шулай эшләргә ирек бирмәгеҙ! Сит ил йоғонтоһо аҫтында эшләгән хөкүмәттәре менән сикләнгән суверенитет хәлендә ҡалған барлыҡ илдәр тиҙ арала хәйерсегә әүерелә. Йәмғиәт һәм дәүләт милке шәхси ҡулдарға күсә, әммә был милектең хужалары булып, ҡағиҙә буларак, сит ил граждандары торасаҡ. Лояллек һәм килешеү юлы аша милек хоҡуғын һатып алыусылар ташлама булыр, ләкин уларҙың милли һәм кешелек намыҫы тураһындағы күҙаллауҙары бөтөнләй икенсегә әүерелә. Иң ҡиммәт милли байлыҡтар бындай шарттарҙа сит ил милкенә күсә, ә әлегә тиклем уға хужа булыусылар үҙ тыуған ерендә сит ил фирмаларына хеҙмәт итәсәк. Милли түбәнһетеү, дәүләтте тарҡатыу һәм социаль емерелеү менән бер рәттән, төрлө социаль патологиялар күҙәтеләсәк, улар араһында енәйәтселек беренсе урында торасаҡ. Был - буш күҙаллауҙар түгел, ошо юлды үтеүсе һәм унан тайпылырға тырышыусы илдәрҙең тере тәжрибәһе. Криминалдың баш ҡалаһы көнбайышта түгел, ә Европаның көнсығышында.

Марионетка хөкүмәттең төп бурыстарының береһе - әгәр шундайҙар власҡа килә ҡалһа - милли үҙаңды юҡҡа сығарыу. Тыштан идара ителгән дәүләттә, тәү сиратта, үҙенең тарихы, үткәне, йолалары, милли символдары, ғөрөф-ғәҙәттәре, бик йыш әҙәби телдәре менән бик тиҙ хушлашалар. Тәү ҡарашҡа һиҙелерлек булмаған, әммә милли үҙаңды бик һөҙөмтәле һәм ҡәтғи һайлап алыу милли кухняның бер нисә ашһыуына, ниндәйҙер йыр-бейеүгә, аҙыҡ-түлек һәм косметика тауарҙарына ҡушылған милли батырҙар исеменә ҡайтып ҡаласаҡ. ХХ быуатта бөйөк державалар тарафынан ниндәйҙер дәүләттең территорияһын баҫып алыуҙың әҙемтәһе булып ошо дәүләттә йәшәгән халыҡтың үҙаңын юҡҡа сығарыу тора. Шундай дәүләттәрҙең тәжрибәһенән күренеүенсә, халыҡ сит телде үҙенеке кеүек ҡуллана башлағанын, үҙенекеләрҙе онотоп, үҙен сит тарихи эшмәкәрҙәр менән сағыштырғанын, үҙ туған әҙәбиәтенә ҡарағанда оккупанттарҙың әҙәбиәтен яҡшыраҡ белгәнен, сит тарих менән һоҡланыуын, үҙенә түгел, ситтәргә оҡшарға тырышыуын һиҙмәй ҙә ҡаласаҡ...

Мин НАТО илдәре хөкүмәте тарафынан финансланған һәм хупланған эшмәкәрлектең әҙемтәләре хаҡында иҫкәртеүҙе үҙемдең бурысым тип һананым. Граждандар миңә ышана ала, әммә ышанырға бурыслы түгел. Бары тик минең иҫкәртеүҙәремә бик һуң, йәғни граждандар үҙҙәренең бер ҡатлылығы, яңылышыуы йәки өҫтән-мөҫтән генә хәл итеүе арҡаһында яһаған хаталарҙы төҙәтеү һуң булғас ҡына ҡолаҡ һалмаһындар ине. Әммә был хаталарҙы төҙәтеү ауыр буласаҡ, ә уларҙың ҡайһы берҙәрен, моғайын, бер ваҡытта ла төҙәтеү мөмкин булмаҫ. Кешеләрҙең үҙҙәре өсөн кемдер һайлаған юлды һайлауы - иң хәүефле яңылышлыҡ".

Ошо интервьюһынан һуң Милошевич "төрмәлә вафат була", Югославия тағы ла вағыраҡ өлөштәргә бүлгеләнә, сербтар үҙҙәренең милли үҙаңын юғалта...

Бөгөнгө ваҡиғалар ағышынан ҡарағанда инде, төрлө илдәрҙә, дәүләттәрҙә булған революцияларҙың, граждандар һуғышының бер үк сценарий буйынса ҡуйылғанын аңлауы ауыр түгел. Сценарий шул уҡ, актерҙары ғына төрлө...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ҒӘРИПЛЕК БУЙЫНСА ПЕНСИЯ

**Һигеҙ йыл отставкаламын һәм хәрби пенсия алам. Былтыр августа мине II төркөм ғәриплек буйынса иҫәпкә ҡуйҙылар. Ғәриплек буйынса өҫтәмә түләүгә хоҡуғым бармы?**

- Хоҡуғығыҙ бар. Ғәриплек буйынса иҫәптә торған бөтә граждандар ҙа федераль ташлама алыусылар категорияһына инә һәм аҡсалата айлыҡ түләүгә (ЕДВ - ежемесячная денежная выплата) хоҡуҡлы. Бындай түләү ғәриптең йәшәү урыны буйынса уның ғаризаһына ярашлы Пенсия фондында тәғәйенләнә. 2013 йылдың 1 апреленән II төркөмгә ҡараған ғәриптәргә айлыҡ аҡсалата түләү күләме 2022,78 һум тәшкил итә. Ә быйыл буласаҡ индексациянан һуң ул 2123 һум буласаҡ тип көтөлә.

## АТАҺЫ ВАФАТ БУЛҒАН

**Биш йәшлек улымдың атаһы менән рәсми рәүештә айырылышҡандан һуң аралашманыҡ. Янылараҡ һеңлеһенән уның мәрхүм булыуын белдем. Улым ҡарауһыҙ ҡалыу буйынса пенсия алырға хоҡуҡлымы?**

- Әгәр ҙә улығыҙҙың тыуыу тураһындағы таныҡлығының "Атай" графаһында элекке ирегеҙ күрһәтелһә, улығыҙҙың бындай пенсияға тулы хоҡуғы бар. Пенсия юллау өсөн йәшәү урыны буйынса Пенсия фондына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## ЯЛДАМЫН, ӘММӘ ЭШЛӘЙЕМ

**Мин 2009 йылдан хәрби пенсионер. Әлеге ваҡытта шәхси эшҡыуарлыҡ алып барам. Пенсияла булғанға күрә, миңә Пенсия фондына түләүҙәр күсермәҫкә мөмкинме?**

- Һәр гражданин, шул иҫәптән ошо өлкәлә эшмәкәрлек алып барған хәрби пенсионер ҙа, шәхси эшҡыуар буларак теркәлеп, эш башлағандан алып, закон менән ҡаралған бөтә түләүҙәрҙе лә тулы килеш һәм ваҡытында күсерергә бурыслы. 2012 йылдың 3 декабрендә ҡабул ителгән 243-сө Федераль законға ярашлы, 2013 йылдың 1 ғинуарынан түләүҙәрҙән түбәндәге шәхси эшҡыуарҙар азат ителә:
- хәрби хеҙмәттә булғандар;
- 1,5 йәшкә тиклемге бала тәрбиәләүсе;
- I төркөм ғәрипте, ғәрип баланы йәки 80 йәше тулған ҡарт кешене ҡараусы.

Ләкин уларға ошо ваҡыт эсендә шәхси эшҡыуарлыҡ алып бармауҙарын документаль рәүештә иҫбат итергә кәрәк.

## ХЕҘМӘТ ӨСӨНМӨ?

**Һеңлем 2006 йылдан алып мәрхүм иренең пенсияһын алып килде. Ләкин әле килеп аҡса яғынан ҡыпҡа отолоуын аңланы. Уға яңынан үҙенең хеҙмәт пенсияһына күсергә мөмкинме?**

- Әгәр ҙә хаҡлы ялда булыусы хеҙмәт пенсияһының бер-нисә төрлөһөн алырға хоҡуҡлы булһа, ул үҙ теләге буйынса уларҙың тик береүһен генә һайларға тейеш. Был Рәсәй Федерацияһының "Хеҙмәт пенсиялары тураһында"ғы 4-се Федераль законында ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта бер пенсиянан икенсеһенә күсеү һаны сикләнмәгән.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Теш һыҙлағанда

❖ Ҡара икмәктең йомшаҡ өлөшөн бер бүлем һарымһаҡҡа ҡушып сәйнәргә, төкөрөк менән йомшарған шул массаны һыҙлаған тешкә һалырға.

❖ Шалфей төнәтмәһен ауыҙҙа торға.

### Баш мейеһе һелкенһә

❖ 2 балғалаҡ мәтрүшкәгә 1 стакан һыу ҡойорға, ҡайнатып сығарырға. Бер аҙҙан һөҙөргә һәм көнөнә 3 мәртәбә 1/3 стакан эсергә. Дауаланыуҙы бер нисә аҙна буйы дауам итегеҙ.

### Күҙҙәр ауыртһа

❖ Сей картуф, алма йәки ҡыярҙы ҡырырға һәм күҙҙәргә ябырға кәрәк.

❖ Муйынға дымлы сепрәк ҡуйыу ҙа отошло.

❖ Күҙ ҡабаҡтары ҡыҙарып, шешеп сыҡһа, аллергия, конъюнктивит билдәһе. Ошо осраҡта һәм күҙгә сүп ингән саҡта, күҙҙәр ҡысығанда бер стакан һыуға ярты балғалаҡ тоҙ һалырға һәм күҙҙәрҙе бер нисә мәртәбә йыуырға.

❖ Күҙгә аҡ төшөүҙән һаҡланыу өсөн арыш икмәген бешереп, эҫе мәлендә уртаһына тишек яһап, төбөн аҫҡа әйләндереп, стакан ҡуйырға. Стакан ситендә йыйылған тамсыларҙы күҙгә тамыҙырға.

### Майҙар ҙа дауа

❖ Бауыр, ашҡаҙан аҫты биҙе ауыртҡанда иртәнсәк 1 ҡалаҡ зәйтүн майы эсергә. Ул шулай уҡ циститтан да файҙалы, был ауырыу ваҡытында майҙы 2 ҡалаҡ эсеү отошло.

❖ Ашҡаҙан йәрәхәтенән һалҡын, ҡараңғы урында һаҡланған һырғанаҡ майын ашарҙан 30 минут алда 1 балғалаҡ эсергә.

### Астма йонсотһа

❖ Ҡабығынан әрселгән 400 гр имбирҙе ваҡ-ваҡ турап, спиртҡа һалырға һәм һары төҫкә ингәнсе төнәтергә, көнөнә бер һелкетеп торорға, һөҙөргә. Бер балғалаҡ төнәтмәне ярты стакан һыуға ҡушып, көнөнә 2 мәртәбә ашағандан һуң эсергә. Дауаланыу ваҡыты 3 аҙна. 10 көндән һуң дауаланыуҙы тағы ҡабатларға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✔ *Көслө позиция биләп өлгөргән командаларға ҡаршылыҡ күрһәтерҙәй яңы төркөмдәрҙең финал уйындарына сыға алмауы ғына бер аҙ күңелемде ҡырҙы. Конкурентлыҡ тигән күренеш "Шаяниум"да йылдан-йыл кәмей бара.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# МАЛДЫҢ ҠОТО КИТМӘҺЕН, ТИП...

**Йорт малын һатыу-һатып алыу йолаһында ла башҡорттар билдәле бер ҡағиҙәләрҙе һаҡлаған. Һатылған мал менән йорт-ҡарала ҡалған малдың ҡото китмәһен өсөн, хужа малдың мөгөҙө эргәһенән йәки һыртынан йөн йолҡоп алып, бер нисә тапҡыр: "Ҡотоңдо алам" йәки "Ҡотоң ҡалһын, үҙең кит" тип ҡабатлаған һәм йөндө һарайҙың бүрәнәләре араһына ҡыҫтырып ҡуйған.**

Һатыла торған малды һарайҙан арты менән сығарғандар; атты йүгәне, һыйырҙы йәки үгеҙҙе муйынындағы арҡаны менән һатҡандар. Һыйыр һатҡанда хужабикә һатып алыусыларҙы һөт-ҡаймаҡ менән һыйлаған, ә улары үҙ сиратында малдың арҡаһына хужаларға бүләккә тәғәйенләнгән таҫтамал йәки күлдәк һалған, ҡайһы саҡта ике яҡ та бүләктәр менән алышҡан. Хужа малын һатып алыусыларға тотторған, малдың яңы эйәһе, һин аҡсаның изгелеген күр, мин малдыҡын күрәйем, тигән теләк теләгән. Йола буйынса, мал һатҡанда ҡул биреп иҫәнләшмәгәндәр, хушлашмағандар. Мал һатып алыусыға артына әйләнеп ҡарарға ярамаған, юғиһә, мал яңы урынға ерегеп китмәй, тигән ышаныу ҙа булған. Әгәр ҙә мал яңы ҡураға эйәләшеп китә алмаһа, яңы хужа малды һатып алған йортҡа барып, һиҙҙермәй генә малға тәғәйенләнгән аҙыҡтан бер аҙ өлөш алып үҙ йортона алып ҡайтҡан.

Ниндәйҙер эш уңышлы килеп сыҡһын өсөн вәғәҙә итеп мал әйтеү йолаһы ла бар. Мәҫәлән, аҡ ҡорбандар салып, кешеләрҙе һыйлау күренеше бөгөн дә һаҡланып ҡалған. Ҡайһы саҡта атай кеше ошондай ниәт әйткән: "Ошо балам торһа, бәрән йәки кәзә салам".

Башҡорттарҙа ҡыр йәнлектәрен (айыу һ.б.) һәм ҡоштарын (аҡҡош, торна) ололау күренеше лә булған. Башҡортостандың урманлы яҡтарында, көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә элегерәк "Айыу туйы" тип аталған байрам үткәрелгән. Әбйәлил башҡорттары уны айыуға һунар алдынан йәки һунарҙан һуң үткәргән. Айыуға изге йәнлек итеп ҡарау һөҙөмтәһендә уның итен ашау ҙа тыйылған. Уның нигеҙендә айыу ите ашау ырыу эсендә ыҙғыш-талаштарға алып килә тигән ышаныу ята.

Йорт малына бәйле башҡа йолаларға килгәндә, салыу һөйәгенә бәйле ғөрөф-ғәҙәттәрҙе бөгөн дә күрергә була. Иттең был өлөшө мотлаҡ рәүештә малды салған кешегә бирелә. Шулай уҡ умыртҡа һөйәген кимергәндә, бүре һуғыр һөйәге тирәһендәге итте ашағанда һөйәккә теште тейҙерергә ярамай, юғиһә, мал уңмауы бар. Ихатаға умыртҡа һөйәген, йортҡа ашыҡ һөйәген элеп ҡуйыу мал ҡотон ҡайтара, тигәндәр. Башҡорттарҙың һарыҡ башына бәйле йолалары башҡа төрки телле халыҡтарҙа ла осрай. Мәҫәлән, ҡаҙаҡтарҙа ихтирамлы ҡунаҡҡа баш итен ашатыу йолаһы бар. Хужа баштың ҡолағын ҡунаҡҡа ҡырҡып бирә, ҡалған ит туралып, тоҙлоҡ ҡойоп ашала.

Мал һөйәгенә бәйле тағы бер ҡыҙыҡлы йола бар. Әгәр ҙә мәгәр берәй кешенең үҙенә ҡарата ыңғай фекерҙә булыуын теләһәң, йылҡы тояғының тояҡ һәм унан өҫкө быуынды тоташтырып тороусы һөйәген бешереп, уны һыйларға кәрәк. Был һөйәк тояҡтың тышау һалынған ерендә урынлашҡан. Кемдеңдер йортондағы тыныслыҡты юҡҡа сығарыу өсөн малдың тубыҡ өлөшөн ошо йорттоң башына ташлағандар.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# БАШҠОРТСА ШАЯРТЫУ...

## балалар телендә лә ныҡлы урын алды

(Башы 1-се биттә).

**Ләйсән Мәзитова, "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы режиссеры:** Һәр "Шаяниум" миндә ҡаршылыҡлы фекерҙәр, хис-тойғолар ҡалдыра. Быйыл да мин командаларҙың сығышын күңелем елкенеп, ихлас бирелеп ҡараным, башҡорт балаларының юмор донъяһында рәхәтләнеп сәйәхәт иттем. Ф. Мостафина исемендәге 20-се Ҡала башҡорт гимназияһынан "ХХ централ" командаһының сәйәси темаға ни тиклем оҫта шаяртыуын ишетеп, халҡыбыҙҙың, туған телебеҙҙең киләсәгенә битараф булмаған йәш быуын үҫеп килеүенә һөйөндөм. Бигерәк тә балаларҙың һәр нәмәгә ҡарата үҙ фекере булыуы ҡыуандырҙы.

Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе күреп, улар өсөн көйөнөп тә ултырҙым. Мәктәп уҡыусыһы булған саҡта, бәлки, тәнәфестәрҙә мин дә иптәштәремдән ҡаты көлгәнмендер. Әммә әлеге финал уйынында ҡатнашыусы ҡайһы бер командаларҙың үҙ иптәштәрен йәберләп, ҡыйырһытып, шунан көлкө тыуҙырырға тырышыуы миңә оҡшаманы. Мәҫәлән, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының "Кендектәр" командаһы үҙенең һәр уйынсыһынан, "Пышка" ашханаһы Дианаға 148 бәлеш инвестициялаған", тигән юҫыҡта көлөп сыҡты. М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы уҡыусыларынан торған "Һупайлы дәрүиштәре" командаһы конкурстың видеояҙма өлөшөндә Радик Юлъяҡшиндың тормош юлын төшөрөп, уның башын ашҡа тығыуы менән "айырылды". Бына бындай көсләү сәхнәләре балалар юморында урын алырға тейеш түгел, минеңсә. Сөнки "Шаяниум" балаларҙа әхлаҡи тәрбиә, мәҙәни ҡиммәттәрҙе һанлауға нигеҙ һалыу өсөн дә хеҙмәт итергә тейешле бәйге.

**Марсель Байдәүләтов, "Юлдаш" радиоһы продюсеры:** "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар бәйгеһе башҡорт юморын, телен һаҡлау өсөн ойошторолған сара булараҡ, үҙ ролен тулыһынса теүәл башҡара, тип уйлайым. Сөнки уйында ҡатнашыусы командалар араһында башҡорт теле дәүләт теле булараҡ өйрәнелгән мәктәп уҡыусылары ла башҡортса бик лайыҡлы кимәлдә сығыш яһаны. Саф башҡортса яңғыраған шаяртыуҙар ни тиклем ҡолаҡҡа ятышлы, йөрәккә май булып яғылыуын бөгөн залда ултырыусы барлыҡ тамашасылар ҙа тойғандыр. Шуға күрә, командалар телмәрҙәрен шымартыу өҫтөндә артабан да эшләүен дауам итһен, тип теләйем. Башҡорт КВН уйындарында киләсәктә билдән түбән юмор ғына түгел, русса һүҙҙәр ҙә урын алмай башлар, тигән өмөттәмен.

**Фидан Ҡолмөхәмәтов, "Башҡорт асыҡ КВН лигаһы"ның беренсе миҙгел уйындарында Гран-при яулаусы:** Мин элек бөгөн Гран-при яулаусы "Ҡыҙыҡ-мажор" командаһы составында уйнаным, уға исемде лә мин ҡушҡайным. Ул ваҡытта берәй ҡасан үҙем жюрила ултырырмын, ә минең тәүге командам шул тиклем юғары кимәлгә күтәрелер, хатта иң юғары баһа яулар, тигән уй башыма ла инеп сыҡмағайны. Әлеге "Шаяниум"да Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернатының "Ҡыҙыҡ-мажор" командаһы уйынсылары үткер көләмәстәре, балаларға ғына хас эскерһеҙ юморҙары менән генә түгел, ә артислыҡ һәләттәре менән дә күңелде арбаны. Тимәк, бәләкәс квнсылар араһында башҡорт юморын артабан да үҫтерерҙәй лайыҡлы алмаш үҫеп килә. Тик бер нисә йыл рәттән сығыш яһап, көслө позиция биләп өлгөргән командаларға ҡаршылыҡ күрһәтерҙәй яңы төркөмдәрҙең финал уйындарына сыға алмауы ғына бер аҙ күңелемде ҡырҙы. Һәр ярышҡа хас булған, бәйгене бәйге иткән конкурентлыҡ тигән күренеш "Шаяниум"да йылдан-йыл кәмей бара, тип иҫәпләйем.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Быйылдан башлап "Шаяниум" бәйгеһендә еңеүсе командалар "Башҡорт асыҡ КВН лигаһы"ның Юниор-лигаһында уйнаясаҡ. Балаларға ижади яҡтан үҫергә, сәмләнергә яңынан-яңы мөмкинлектәр асылып тора әле. Һүҙҙең йомғағында "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар бәйгеһенең еңеүселәре менән таныштырабыҙ:**

**III урын - Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының "Кендектәр" командаһы;**

**II урын - Фатима Мостафина исемендәге 20-се Ҡала башҡорт гимназияһының "ХХ централ" командаһы;**

**I урын - Республика башҡорт лицей-интернатының "Башҡорттар.ru" командаһы;**

**Гран-при яулаусы - Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия интернатының "Ҡыҙыҡ-мажор" командаһы.**

**"Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында Нурлан Сабитов ("Башҡорттар.ru"), ә "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле"ндә Филүзә Рәшитова ("Ҡыҙыҡ-мажор") билдәләнде.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**


"Башҡорттар.ru".


"ХХ централ".


"Кендектәр".

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БАШҠОРТ АТЛЫЛАРЫНАН...

## тарихтарға һыймаҫ дан ҡалған



Алтмышынсы йылдарҙан башлап Башҡорт атлылар дивизияһы ветерандары араһында йыш булырға сәбәптәр сығып ҡына торҙо. Хәтеремдә, өлкән йәштәге Ғүмәр Чурмантаев (ветерандар советы рәйесе булып та эшләне) бигерәк тә йыш сығыш яһар ине. "Мин - шайморатовсы!" тип башлай торғайны һүҙен, шул саҡтарҙа зал дәррәү ҡул сабыр ине. Һүҙ ҡуйырып, бәхәс ҡыҙып киткәндә лә юғалып ҡалманы был ветеран һәм сығышын һәр ваҡыт: "Не спорьте со мной, дорожите воинской клятвой, башкиры в плен не сдавались!"- тип тамамлап ҡуйыр ине. Зал ҡайтанан көслө алҡыштарға күмелер ине. Ғ. Чурмантаев дивизия ойошҡан көндәрҙә хәрби комиссариатта хеҙмәттә булған, дивизияға килгәс, штаб начальнигы булараҡ абруй ҡаҙанған, 1943 йылда разведчик булараҡ танылған.

Дивизияның хәрби юлдарын тәү башлап С. Ҡадиров һүрәтләне. Ул Башҡорт дивизияһы һәм Шайморатов тураһында яҙмаһа, беҙ бөгөн күп мәғлүмәттәрҙән мәхрүм ҡалыр инек. Уға Йыһат Солтанов эскерһеҙ ярҙам итте. Әммә дивизия тарихы, бигерәк тә Шайморатовтың тормош юлы хәрби әҙерлекле һәм бай интеллектлы тикшеренсене көтә, тип раҫларға урын бар. Генерал Шайморатов һәм ул етәкләгән яҡшы әҙерлекле дивизия юҡҡа ғына СССР Ҡораллы Көстәре тарихында берҙәнбер һәм тиңһеҙ булыуы менән айырылып тормайҙыр.

Мәскәүҙә, Үҙәк архивтарҙа эҙләнеп тә дивизия тураһында аҙмы-күпме мәғлүмәт туплағанмын. Һуңынан яу үткән ерҙәрҙә булыу теләге тыуҙы. Бер-бер артлы Сталинград, Ростов, Ворошиловград өлкәләрендә булып, урындағы тарихсылар, мәктәп уҡыусылары, хакимиәт вәкилдәре, эҙәрмәндәр менән осрашыу бәхете тейҙе. Чернухино ауылында, мәҫәлән, атлылар хөрмәтенә монументаль һәйкәл ҡуйылған. Бейеклеге - 7 метр. Һалдаттың уң ҡулбашына ат башын терәгән. Аһәңле композиция! Шул уҡ Чернухинола Шайморатовтың төн эсендә атлы ғәскәрҙе ҡамауҙан алып сыҡҡан соҡорон һишөп ҡараным. Самаһыҙ тәрән, агаслыҡ менән ҡапланған, әллә ҡайҙарғаса һуҙылған соҡор. Шайморатов исеме менән аталған урам буйлап та атлап үттем. Ҡаршыма осраған балалар менән һөйләшкәндә, улар: "Как же, знаем, с приходом башкирского войска наши бабушки вывесили красные флаги. Думали, вернулись навсегда", - тине. Ҡайһылыр йорт янында команда пункты урынлашҡан мөгәрәпте күрһәттеләр. Штеревкаға баргас, беренсе сиратта Шайморатов һәләк булған урынға барып, баш эйҙек. Өлкән йәштәге уҡытыусы Мария Германовна Никифорова (ире Шишмәнән) һәм Эҙәрмәндәр клубы етәксеһе Николай Романов экскурсияны ҡараңғы төшкәс тә дауам итеп, батырҙар һөйәге ятҡан урындарҙы күрһәтте. Тулҡынландырғыс сәфәр! Үткер ҡырлы таш ҡаплаған был ҡалҡыулыҡтың һәр метрында тиерлек ҡаһармандар мәйете ятып ҡалған. Ерҙә аяҡ баҫыуы ла уңайһыҙ. Бәлки, тап ошонда кемдеңдер ғәзизе яталыр...

Ҡаһарман башҡорттар үткән башҡа яу ерҙәрендә лә аҙмы-күпме йөрөргә тура килде. Осрашыуҙарҙа булғанда үҙемдең Башҡортостандан икәнемде әйтһәм, өлкән йәштәгеләр араһынан, "Мы хорошо знаем вас, башкир, они освободили наше село, никого не обижали, во всем помогали", тип ҡәҙер-хөрмәт күрһәтергә әҙер тороусылар күп булды. Липецк өлкәһенең Тербун ауылында һикһән өстөндәге ике әбей былай һөйләне: "Когда мы были под немцами, они, супостаты, всю живность переловили. Хорошо, их быстро прогнали. Пришли башкиры, так они лучше родного были. Но нависла угроза возврата вражеской части. Так, башкиры помогли своими подводами, помогли грузиться. Слава им, фашистов не пустили, прогнали. Как можно забыть такое!"

...Яҡташтарыбыҙҙың яу яландарындағы ҡаһарманлыҡтары менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ, әммә күп һанлы юғалтыуҙар күҙ алдына баҫҡанда, йөрәктәргә ҡан һауғандай була, ирекһеҙҙән ҡайғы-хәсрәт яныра. Күптәр ҡартатаһының үле кәүҙәһе ҡайҙа ятып ҡалғанын, ул тейешенсә ерләнгәнме-юҡмы икәнен белә алмай интегә, үҙен был тарафтан ғәйепле һанай. Әлбиттә, ил өсөн ғүмерен биргән һалдаттарыбыҙ эҙен юллап йөрөү байрам түгел. Ә шулай ҙа юлларға кәрәк. Улар ҡан түккән урындарға барып, доғалар уҡып, йәндәрен тынысландырыу, ҡәберҙәре алдында баш эйеү зарур.

**Фәрит ВАХИТОВ.**
**(Аҙығы. Башы 9-10-сы һандарҙа).**

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# АХЫРЫЗАМАН ҺИҘЕЛМӘҺЕН, ТИПМЕ?



**Һөйөндөк Аҫылов тәҡдим иткән "Килешмәйем" тигән рубрика эргәһендә "Килешәм" тигәне лә булырға тейеш һымаҡ. Сөнки хатта гәзитебеҙҙе уҡығанда ла бер авторҙың фекере менән килешәһең, икенсеһенең фекере менән килешмәйһең, ә өсөнсөһөнөң фекеренә өҫтәп, үҙ фекереңде белдереп, хат яҙып һалғың килә лә тора.**

Бына әле лә иҡтисад фәндәре кандидаты Илдар Ғәбитовтың "Ирҙәр буйҙаҡлығына баҙар иҡтисады ла, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ғәйепле" (4-се һан) тигән бик төплө мәҡәләһенә фекер өҫтәге килде. Автор Рәсәйҙә ҡатын-ҡыҙҙар иҫәбе егеттәрҙекенән 10 миллионға артығыраҡ, тигән мәғлүмәт бирә биреүгә. Ә бына беҙҙең Черниковка биҫтәһендәге күренеште күҙәтһәң, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың, ирҙәр аҙ, тип юғалып ҡалмай икәнен аңлайһың. Аҙым һайын тигәндәй үзбәк, тажик ирҙәре коляска тәгәрәтә, ә яндарында урыҫ, татар, башҡорт милләтле ҡатындары йылмайып атлай. Гастарбайтерҙар эсмәй, тартмай, дин тота, итәғәтле, иғтибарлы шул. Рәсәйҙә йәшәп китер өсөн дә бөтә тырышлығын эшкә егә улар. Йәшәр урыны булһа - шул етә. Бындағы ғаиләһен дә, тегендәге, тыуған яғында ҡалғанын да ҡарай, матди яҡтан тәьмин итә. Әлбиттә, ҡайһы саҡта ул гастарбайтерҙарҙың тегендәге ҡатындары ла күсеп килә, тиҙәр. Ул саҡта бындағылары менән ни ҡыла икән ул ир-егеттәр?

Ә "Килешәм" тигән рубрика ла булһа, билдәле ҡурайсы Юлай Ғәйнетдиновтың шул уҡ 4-се һанда баҫылған күп фекерҙәрен дауам итер инем. "Урал батыр" эпосы конкурстарҙа фәҡәт башҡорт телендә уҡылырға тейеш!" тигәне менән тәү сиратта килешәм.

Тағы... Бер туҡтауһыҙ байрам итеүҙәр, йырлап-бейеүҙәр менән дә килешмәйем. Бик күп аралашҡан кешеләрҙән дә ишеткәнем бар был турала. Мин шаяртып: "Бер тапҡыр ергә ахырызаман килгән, ти. Тик халыҡтың йырлап-бейеп, байрам иткән сағына тура килгән дә, кешеләр уны һиҙмәй ҡалған, ти", - тигән булам. Ысынлап та, сәбәләнмәй генә иҡтисадты, ауыл хужалығын, йәшәү кимәлен күтәреү өсөн эшләү урынына, бер туҡтауһыҙ бейетәләр, йырлаталар, халыҡ ахырызаманды һиҙмәй ҡалһын, тип уйлайҙармы икән?..

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Тәпәш һәм йомшаҡ яға уң яҡҡа тегелгән элмәгә эленгән йәки ыңырбау менән бәйләнгән. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының һәм оло әбейҙәрҙең күлдәгенең иҙеүендә башҡа элмәктәр булмаған. Оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың күлдәктәре ситсаның төҫө буйынса ла айырылып торған: улар һәр саҡ аҡ йәки бик һирәк бер төҫлө ҡара туҡыманан тегелгән, ә йәш ҡатын-ҡыҙ сағыу төҫтәге сыбар туҡымаларға өҫтөнлөк биргән.

Урал арьяғындағы һәм көньяҡтағы йәш башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының күлдәктәре үҙенсәлекле бесеңгән. Был күлдәктәр ике өлөштән торған: оло ҡатын-ҡыҙҙыҡы кеүек үк өҫкө һәм бил тирәһендә бөрмәгә йыйылған итәк өлөшөнән. Ошо ике өлөш араһына күлдәктекенән айырылған сағыу тар туҡыма тегелгән. Итәк осона бер-береһенә параллель рәүештә урынлаштырылып, тар ғына төрлө төҫтәге таҫмалар тегелгән, ҡайһы берҙә итәк осо тамбур ысулы менән биҙәлгән. Шундай уҡ таҫмалар йәки тамбур ысулы менән ең остары, иҙеү уйымы ҡаймаланған. Ҙур булмаған, нигеҙҙә ултырма яға ике төймәгә йәки ике ҡаптырмаға ҡаптырылған (һүрәт); бик һирәк яға ҡайтарма булған һәм бәйләп ҡуйылған.



Ҡатын-ҡыҙҙар күлдәгенең өсөнсө төрө Башҡортостандың үҙәк, Өфө, төньяҡ-көнбайыш өлөшөнә хас һәм ул атап үтелгән төргә оҡшаған, әммә төрлө биҙәүҙәр менән ҡатмарландырылған. Был күлдәктә өҫкө өлөш тотош туҡыманан тегелгән; ян-яҡтан сағыу, күлдәк туҡымаһынан айырылып торған туҡыманан өҫтәмә индерелгән. Бөрмәле итәк өҫтөнән киң (20 сантиметр самаһы) ҡоршау тегелгән. Ҡоршауҙың аҫҡы яғы бер йәки ике сағыу таҫма менән ҡаймаланған. Итәк осо ла шундай таҫмалар менән биҙәлгән. Иҙеү уйымы ваҡ көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән; бейек яға ҡаптырма ырғаҡтарға эләктерелгән.

XX быуаттың урталарында В. М. Черемшанский башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының күлдәге төрлө ебәк туҡымалар һәм сигеүҙәр менән биҙәлгән, тип белдерә. П. С. Назаров уларҙың һарауысҡа оҡшатып эшләнгәнлеген билдәләй. Нисек кенә булмаһын, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының күлдәге һуңғы 150 йылда ныҡ үҙгәрештәр кисерә.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың икенсе эске кейеме булып түшелдерек йәки күкрәксә торған. Ул 30х40 сантиметр ҙурлығындағы, ике өҫкө осо бөкләнгән һәм дүртмөйөшлө төҫлө туҡымалар тегелгән, төҫлө ептәрҙән төрлө биҙәктәр сигелгән туҡыма киҫәген (һүрәттәр) тәшкил иткән. Туҡыманың мөйөштәренә ептәр бәйләнгән, уның өҫкө осо - муйындан артҡа, аҫҡы осо билдән арҡаға бәйләп ҡуйылған. Был кейемдең маҡсаты күлдәктең асыҡ торған иҙеүен ҡаплау булған.





# "УРАЛ" ҺҮҘЕН БӘЛӘКӘЙ ХӘРЕФТӘН ЯҘМА,

## йәки Тәржемә эштәренә бер ҡараш

**Оҙаҡ йылдар нәшриәт өлкәһендә, ваҡытлы матбуғат баҫмалары редакцияларында тәржемәсе, мөхәррир, корректор булып эшләү дәүерендә китаптар, гәзит материалдары, мәҡәләләрҙең руссанан башҡортсаға ауҙарылған текстарындағы ҡытыршылыҡтар, хаталарҙы күреп, йән әрнегән саҡтар күп булды, әле лә шулай дауам итә. "Киске Өфө" гәзите аша шул хаталарҙың ҡайһы берҙәре тураһындағы һүҙемде тәржемә менән эшләүселәр иғтибарына еткергем килгәйне.**

### Теле аңлашылмай, тиҙәр

Тәржемә - ул төрлө яҡлы белем (киң эрудиция), логик фекерләү, телде һиҙемләү (интуиция), егәрлелек, иғтибарлылыҡ, ҙур яуаплылыҡ талап иткән уғата ла ауыр, ҡатмарлы хеҙмәт. Бының өсөн, беренсенән, башҡорт мөхитендә үҫергә кәрәк; икенсенән, тел ғилеме менән һыу кеүек эсергә тейешһең. Башҡорт теле грамматикаһын йүнләп белмәгән, филологик белемһеҙ кешеләр тәржемә эшенә нисек йөрьәт итә икән? Ә бит шулай итәләр ҙә. "Әй, тәржемә эше пүстәк бит ул, һүҙлектәргә ҡарайһың да, яҙаһың", - тигәнен күп ишеткәнем бар бер туктауһыҙ һүҙлеккә ҡарап "тәржемә" итеп ултырған бәғзе берәүҙәрҙән.

Был - төптә хата фекер. Шуға күрә лә бит мәктәп уҡытыусыларынан бик күп тәнҡит һүҙҙәре ишетергә тура килә, сөнки электән үк дәреслектәрҙе махсус белеме булмаған кешеләр тәржемә итә торғайны. "Нинә башҡортса гәзиттәр алдырмайһың?" - тип һораһаң, "Теле аңлашылмай", тип яуап бирә ҡайһы берәүҙәр. "Киске Өфө" гәзитен халыҡ ни өсөн йығылып ятып уҡый? Бихисап сәбәптәрҙең береһе - теленең халыҡсанлығы. Әлбиттә, унда ла тәржемә ителгән мәҡәләләр менән авторҙар яҙып ебәргәндәренең айырмаһы ер менән күк араһы. Төрлө авторҙың мәҡәләһенең стиле төрлө булыуы ихтимал, шулай ҙа тәржемә ителгән яҙмаларҙы мөмкин тиклем халыҡ теленә яҡынайтыу фарыз. Юғиһә, һуңғы йылдарҙа һутлы тыуған телебеҙ урынына рус теленән арлы-бирле ауҙарылған ниндәйҙер ҡоро яһалма тел барлыҡҡа килде түгелме һуң? Әҙәби тел тигәс тә, ул ябай һөйләү теленән шул тиклем алыҫлашырға тейеш түгел бит инде. Хатта һөйләгәндә лә майҙай йомшаҡ башҡорт һүҙҙәрен ҡаты итеп әйтә башланылар (телерадио тапшырыуҙарынан ишетеп торабыҙ). Мәҫәлән, "бабай" һүҙе "бавай" тип әйтелергә тейеш.

### "Һәм" һүҙе тураһында

Телебеҙҙе сүпләүсе итеп "һәм" һүҙен артыҡ ҡулланыуҙы күрһәтергә була. Ул сит телдән үҙләштерелгән теркәүес, беҙҙең телгә бөтөнләй хас түгел. "Киске Өфө"лә Бөрйәндән Көнһылыу Ҡотлобаева апайҙың мәҡәләләр теҙмәһе баҫылып сыҡҡайны, унда мин бер "һәм" дә тапманым. Тәржемә иткәндә, русса текста күпме "и" булһа, башҡорт телендәге һөйләмдәрҙә лә шунса "һәм" яҙып ултырыу дөрөҫ түгел. Юғиһә, ҡайһы бер һөйләмдә 5-6 "һәм" осрай! Ул һөйләмдәрҙе "һәм" ҡуймайынса ла, бына тигән тәржемә итеп була лабаһа, бының ысулдары бик күп. Мәҫәлән, "Ҡалаға килдем һәм уҡырға индем" тигән ябай ғына һөйләмдә "һәм"дән ошолай ҡотолоп була: "Ҡалаға килдем дә уҡырға индем", йә "Ҡалаға килеп, уҡырға индем", йә "Ҡалаға килгәндән һуң уҡырға индем", йә "Ҡалаға килдем, уҡырға индем". Шулай уҡ "һәм" урынына "менән" һүҙен ҡулланырға була. Рәсми, фәнни стилдәге текстарҙа, бәлки, унһыҙ ҙа булмайҙыр, әммә мөмкин тиклем "һәм"дәрҙән ҡотолорға кәрәк. Шулай итһәң, һөйләмдәр ыҡсым, матур, үҙебеҙсә була. Ауылдарҙа халыҡтың телмәренә иғтибар итегеҙ әле, берәү ҙә ул һүҙҙе ҡулланмай бит.

### Һүҙ урынына - һүҙбәйләнеш

Тағы ла шул күҙгә ташлана: рустың "многочисленный" һүҙен "күп һанлы" тип туранан-тура тәржемә итәләр. "Күп" тин дә ҡуй инде шуны, "һанлы"һы нимәгә хәжәттер. "Бихисап", "байтаҡ", "бик күп" тип тә әйтергә була, үҙебеҙсә варианттар һанап бөткөһөҙ.

"Сегодняшний день" тигәндe "бөгөнгө көн" тип әйтеү ҙә дөрөҫ булмай. "Бөгөн" һүҙе үҙе үк ике һүҙҙән тора (был + көн), уға нинә тағы ла бер "көн"дә өҫтәргә? Был бит күрәләтә тавтология (ҡабатлау). "Быйылғы йыл" тигәндә лә шул уҡ хәл (был + йыл = быйыл). "Бөгөнгө көндә" һүҙбәйләнешен алмаштырыу юлдары: хәҙерге көндә, хәҙерге ваҡытта, хәҙер; әле, әлеге көндә, әлеге ваҡытта, әлеге мәлдә, хәҙерге заманда һ.б.

"Ҡулланыу" һүҙе дөрөҫ ҡулланылмай. Мәҫәлән, "һүҙлек (йәки башҡа әйбер) менән ҡуллана" тигән һүҙбәйләнеш йыш осрай башланы. Был осраҡта "һүҙлек ҡуллана", "һүҙлекте ҡуллана" тип әйтеү дөрөҫ булыр, "менән" һүҙе үҙ урынында түгел. Ә бына "файҙалана" һүҙен ҡулланғанда "менән" тигән вариант урынлы.



### Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһе

Бер мәҡәләлә барлыҡ осраҡтарҙы ла ҡарап бөтөү мөмкин түгел. Хәҙер дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә ҡағылышлы мәсьәләгә ҡарата бер кәлимә фекер. Русса һүҙбәйләнештәрҙәге бәләкәй хәреф менән яҙылған һүҙҙәр башҡортса ла ҙур хәреф менән ҡала. Мәҫәлән, оренбургские степи - Ырымбур далалары, оренбургский платок - Ырымбур шәле. Руcстар бәләкәй хәреф менән яҙа, тип, башҡорттар үҙҙәренең ауыл-ҡала, йылға-күл, тау һ.б. исемдәрен бәләкәй хәреф менән яҙырға тейеш тимәгән бит. Руссала яңғыҙлыҡ исемдәргә -ский (-ская, -ское) ялғауы ҡушылып, был һүҙҙәр сифатлаша, шуға бәләкәй хәреф менән яҙыла. Ә беҙҙә улар исем булып ҡала, өҫтәүенә, яңғыҙлыҡ исем! Был күренеш айырыуса геология, география, биология, зоология, археология өлкәһендәге терминдарға ҡағыла. Ошо даирәләрҙә эшмәкәрлек алып барған ғалимдар үҙ фәнен бик яҡшы белә, әлбиттә. Шулай ҙа улар күбеһенсә русса уҡып, яҙып, русса фекерләп өйрәнгән. Улар башҡорт теле грамматикаһының бөтә нескәлектәрен яҡшы белә, тип әйтеп булмай. Миҫалдар: Көңгөр ярусы, Күгәрсен свитаһы, Байкал йылырсыҡлығы (геология); Ирәмәл эттабаны, Урал елбәгәйе, Себер таштишәре, Кавказ күрәне (биология); Европа бәрҙеһе, Америка шәшкеһе, Альп ҡуныҙы (зоология); Бахмут осоро (археология), Ырғыҙ-Кәмәлек башҡорттары (тарих, этнография) һ.б. Ундай һүҙбәйләнештәрҙә, ҡушма һүҙҙәрҙә, мәҫәлән, Урал, Ирәмәл атамаларының бәләкәй хәреф менән яҙылыуы башҡа һыймаҫлыҡ хәл! Быға нисектер ҡул бармай. Илһөйәр булғанға ғына түгел, ә башҡорт теле закондарының тупаҫ боҙолоуы шаҡ ҡатыра. Кеше исемдәре генә ҙур хәреф менән яҙыламы ни? Беҙ, филологтар, ни өсөн биолог, геологтарҙың арбаһына ултырырға тейеш һуң әле? Рус теленең үҙ ҡағиҙәләре, ә башҡорт теленә ул ҡағиҙәләр тап килмәй. "Башҡорт теленең грамматикаһы рус теленекенән күсереп эшләнгән", тип юҡҡа ғына әйтмәгән булып сыға инде беҙҙең телдә өйрәнгән немец ғалимәһе. Был, ысынлап та, шулай. Башҡорт халҡын өйрәнеүсе тәүге рус этнографтары башҡорт һөйләштәрен квалификациялағанда ер-һыу атамаларын бәләкәй хәреф менән яҙған (сөнки рус теле ҡағиҙәһе шулай), уларҙың тикшеренеүҙәрен өйрәнгән башҡорт ғалимдары ла шунан күреп ҡабатлағандыр, тип уйлар инең, мәшһүр ғалимыбыҙ Ж. Кейекбаев, унан һуңғы телсе Ғ. Сәйетбатталов һ.б. "Ҡыуаҡан диалекты, Юрматы диалекты, Ҡариҙел һөйләше" тип яҙған. Ниндәй генә һүҙбәйләнештә лә ҙур хәреф менән яҙылырға беҙҙең телдә ер-һыу атамалары! Йәштәр оло, абруйлы белгестәрҙән өлгө ала бит - шуны онотмаһаҡ ине.

*Тәржемә иткәндә, русса текста күпме "и" булһа, башҡорт телендәге һөйләмдәрҙә лә шунса "һәм" яҙып ултырыу дөрөҫ түгел. Ул һөйләмдәрҙе "һәм" ҡуймайынса ла, бына тигән тәржемә итеп була лабаһа. Мәҫәлән, "Ҡалаға килдем һәм уҡырға индем" тигән ябай ғына һөйләмдә "һәм"дән ошолай ҡотолоп була: "Ҡалаға килдем дә уҡырға индем", йә "Ҡалаға килеп, уҡырға индем", йә "Ҡалаға килгәндән һуң уҡырға индем", йә "Ҡалаға килдем, уҡырға индем". Шулай уҡ "һәм" урынына "менән" һүҙен ҡулланырға була. Рәсми, фәнни стилдәге текстарҙа, бәлки, унһыҙ ҙа булмайҙыр, әммә мөмкин тиклем "һәм"дәрҙән ҡотолорға кәрәк. Шулай итһәң, һөйләмдәр ыҡсым, матур, үҙебеҙсә була. Ауылдарҙа халыҡтың телмәренә иғтибар итегеҙ әле, берәү ҙә ул һүҙҙе ҡулланмай бит.*

✓ *Һүҙлектәрҙә лә, ҡыҙғанысҡа күрә, хаталар байтаҡ. Ә кеше уларға ышана. Бер һүҙлектең бер үк битендә "һыуһаҡлағыс" һүҙе ҡушып та, айырым да яҙылған. Бер нисә һүҙҙән торған ер-һыу атамалары мотлаҡ бергә ҡушылып яҙыла.*



Шуға тәржемә менән бик һаҡ эш итергә кәрәк.

## Тағы бер осраҡ

Бер нисә һүҙҙән торған ҡушма һүҙҙәрҙә тәүге һүҙ генә ҙур хәреф менән яҙыла. Мәҫәлән, Донъя кубогы, Әсә көнө, Күҙ ауырыуҙары институты. Урыҫсаһында ла шул уҡ ҡағиҙә: Кубок мира, День матери, Институт глазных болезней. Иҫтә ҡалдырыуы еңел генә был ҡағиҙәне. Тик аптырап ҡалмаҫҡа, ғәмәлдә ҡуллана белергә генә кәрәк.

Район гәзите редакцияһында эшләгәндә, махсус белеме булмаған хеҙмәткәр байрамдар тураһында һүҙ барғанда "көнө" һүҙен ҙур хәреф менән яҙып тик ултыра торғайны, ул ғына ла түгел, ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшә, үҙенекен иҫбат итер өсөн: "Русcаһында шулай бит", - тип ныҡыша. Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ буйынса редакцияға килеп урынлашҡайны шул ул.

- Ә ниндәй һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙыла һуң улай булғас? - тип һораны шулай ҙа.

- Тәүге урында торған теләһә ниндәй һүҙ, - тип яуап бирҙем мин уға.

Оҙонораҡ һүҙбәйләнештәрҙә: "Башҡортостан пионерҙары" төбәк балалар ойошмаһы ("Региональная детская организация "Пионеры Башкортостана"), "Балалар ойошмалары федерацияһы" халыҡ-ара ойошмаһы (Международная организация "Федерация детских организаций"). Күренеүенсә, урыҫса менән башҡортса тап килмәй.

## Ҡушма һүҙҙәрҙәге хаталар

Ҡушма һүҙҙәрҙә хата яһауҙарҙың бик күп осраҡтары бар. Мәҫәлән, бер баҫмала "ҡанэскес" тигән һүҙҙе күреп иҫем китте. Беренсе синыф балаһы ла белә (был ҡағиҙә "Әлифба"ны үткәндә өйрәнелә): башҡорт телендә "э" хәрефе бер ҡасан да һүҙ уртаһында яҙылмай. Ул һүҙ "ҡан эскес" тип айырым яҙылырға тейеш, әгәр бергә яҙыла икән, ошолай булыр ине: "ҡанескес" ("үҙешмәкәр" һүҙе кеүек).

Нәҙек һуҙынҡылы ҡушма һүҙҙәрҙә - нәҙек айырыу билдәһе, ҡалын һуҙынҡылыларында ҡалын айырыу билдәһе ҡуйыла. Мәҫәлән, мөьмин (Мөьминшин - урыҫсаһы - Мукминшин), Ҡөрьән, Гөльямал, Хупъямал, Байъегет (Баййегет, Байегет түгел).

Айырым яҙылған ҡушма һүҙҙәрҙе һүҙлектәрҙән эҙләй белмәгән тәржемәсегә ҡыйынға тура килә. Мәҫәлән, летучая мышь. Бер гәзиттә уны "осоусы сысҡан" тип тәржемә иткәндәр. Мәҡәлә исемендә ат башындай итеп баҫылып сыҡты ул. Ә бит был йәнлек башҡортса ярғанат була! Шулай уҡ водяная крыса - һыу ҡомағы түгел, көшөл икән. Божья коровка - ҡамҡа (беҙҙең яҡта "күсапай" тиҙәр), ә ул һүҙлектә "алла һыйыры" тип яҙылған. Бына һүҙмә-һүҙ тәржемә итеү ниндәй көлкө хәлгә килтерә! Һүҙлектәрҙә лә, ҡыҙғанысҡа күрә, хаталар байтаҡ. Ә кеше уларға ышана. Бер һүҙлектең бер үк битендә "һыуһаҡлағыс" һүҙе ҡушып та, айырым да яҙылған. Бер нисә һүҙҙән торған ер-һыу атамалары мотлаҡ бергә ҡушылып яҙыла. Мәҫәлән, Шүлгәнташ, Балҡантау, Кәлимосҡан, Ҡарабейәаҫҡан, Дүртөйлө, Кинйәабыҙ. Элек бергә ҡушылып яҙылған ҡушма һүҙҙәрҙә ике һуҙынҡы тура килһә, береһе төшөп ҡала торғайны, мәҫәлән, Миңләхмәт (хәҙер Миңлеәхмәт тип яҙалар).

## Тыныш билдәләре

Тәржемә ителгән мәҡәләләрҙәге тыныш билдәләре тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Русса һөйләмдәрҙә нисек ҡуйылһа, башҡортсаһында ла шулай ҡуйып тик ултыралар өтөр, һыҙыҡ, ике нөктәләрҙе. Әйтәйек, башҡорт телендә оҙон һыҙыҡ (тире) һөйләмдең тәүге өлөшөндә торһа, руссала һуңғы өлөшөндә урын ала. Мәҫәлән, "Йылҡы итенән - ҡаҙы, ә һыйыр йә һарыҡ итенән тултырма яһағандар". Бында, ҡабатлау булмаһын өсөн "яһағандар" тигән хәбәр төшөрөп ҡалдырылған, унын урынына һыҙыҡ ҡуйылған; был ҡағиҙә һөйләмдең башҡа киҫәктәренә ҡағылмай (һөйләмдәге теләһә ҡайһы һүҙҙе төшөрөп ҡалдырып, унын урынына һыҙыҡ ҡуйыу дөрөҫ түгел, ундай ҡағиҙә бөтөнләй юҡ). Сағыштырыу өсөн руссаһы: "Из конины готовили казы, а из говядины или баранины - тултырма". Ҡайһы бер осраҡтарҙа русса һөйләмдә - һыҙыҡ, башҡортсаһында ике нөктә ҡуйыла.

Бер мәҡәләлә барса осраҡтарҙы ла ҡарап бөтөп булмай, әлбиттә. Һүҙ ыңғайында шуны ғына әйтке килә: юғары уҡыу йорттарында филология буйынса белем алыусыларҙы тәржемә эшенә лә ныҡлап өйрәтһендәр ине. Башҡорт теле ғалимдарының дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үҙгәртеүе лә буталсыҡлыҡ тыуҙыра. Мәҫәлән, элек "баш ҡала" һүҙе ҡушып яҙыла торғайны, "һүҙьяһалыш" һүҙендә ҡатылыҡ айырыу билдәһе ҡуйыла ине.

Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре буйынса ҡулланма кәрәклеге көн кеүек асыҡ - тел ғалимдарынан шуны дүрт күҙ менән көтәбеҙ. Ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе үҙгәртмәйенсә лә булмай. Рим цифрҙарынан һуң ялғау ҡуйылмай, тигән ҡағиҙә бар ине (был ҡағиҙә лә рус теленән үҙләштерелгән), хәҙер уны үтәмәйҙәр, "Петр I-гә", "Екатерина II-не" тип яҙалар. Дөрөҫ эшләйҙәр, сөнки башҡорт теле - ул ялғауҙар теле (ябайлаштырып әйткәндә). Ялғауын яҙмаһаң, һөйләм аңлашылмай. Ҡыҫҡартылған һүҙҙәрҙә лә шул уҡ хәл. Руссаһында ялғауһыҙ ҙа аңлашыла, сөнки "в", "у", "с" кеүек предлогтар бар. Мәҫәлән, учится в БГУ (башҡортса: БДУ-ла уҡый). Ғәлиевтән өйрәнә - учится у Галиева. Ҡыҫҡартҡан осраҡта "Ғ. өйрә-нә", тиһәк, һөйләмдең мәғәнәһе аңлашылмай. Шуға күрә йә ҡыҫҡартҡан һүҙ янына мотлаҡ ялғау ҡуйырға, йә һүҙҙе тултырып яҙырға кәрәк. Башҡорт теле закондарын белмәгән "белгес" кенә бындай форманы туранан-тура рустарҙан күсереүе мөмкин.

## Радио, телевидение хаталары

Гәзит-журналдарҙа ғына түгел, радио, телевидение, театрҙарҙа ла тәржемә эше насар ҡуйылған. Мәҫәлән, театрҙа бер спектакль ҡарағанда (тәржемә ителгән пьеса буйынса) сәхнәнән актерҙың зәйтүнде олива тип әйтеүе аптыраҡайны. Телевизорҙағы балалар тапшырыуында рус әкиәте тураһында һүҙ барғанда, оҫта тимерсе бетте дағалай, тип әйтелде, ә бит ул бөрсәне (блоха) дағалай. Тәржемә ителгән кинофильмдарҙа ла лексик, грамматик, стилистик хаталар быуа быуырлыҡ. Артистар тәржемә эше менән шөғөлләнергә тейеш түгел дә инде. Ә мөхәррирҙәр ҡайҙа ҡарай, тигән һорау тыуа. Ете класс белемле бер төҙөүсе апайҙың, телевизорҙағы башҡортса хаталар өсөн оялам, тип әйтеүе уйландырырлыҡ. Телевидение дикторҙарының, хәбәрселәренең (барыһы ла түгел, әлбиттә), һөйләгәндә логик баҫымды дөрөҫ ҡуймауы арҡаһында, телмәрҙәре бигерәк ҡыҙыҡ яңғырай, хатта минең бәләкәй ейәнем, аптырап: "Өләсәй, ниңә улай һөйләшәләр ул?" - тип һорай. Иманым камил, был хеҙмәткәрҙәр үҙ-ара аралашҡанда, өйҙә үҙебеҙсә "нормаль" һөйләшәлер. Театр сәхнәләрендә лә, телевидениела ла яһалмалыҡ сәскә ата. Бына был осраҡта рус артистарынан өлгө алырға була. Тәбиғилеккә ни етә! Беҙҙең халыҡ бер ҡасан да ҡылансыҡланып һөйләшмәгән.

Иғтибарлыраҡ, ихтирамлыраҡ булайыҡсы үҙ туған телебеҙгә, милләттәштәр!

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Автор уғата мөһим мәсьәлә күтәрә. Тәржемә материалдарындағы, башҡортса яҙыуҙарҙағы хаталар күҙҙе тишеп килеп инеүе етмәгән, һөйләштәрҙәгеләре ҡолаҡты шаулатып, нервыларҙы ҡуҙғытып йонсота. Бына әле генә республикалағы бик матур конкурстарҙың береһе "Һылыуҡай" булып үтте. Уны байрам көндәрендә Башҡортостан юлдаш телеканалынан күрһәттеләр. Ҡыҙҙарҙың һылыу йөҙөнә, нескә һынына, талантлы сығыштарына һоҡланыу, "Былар һүҙ генә һөйләмәһен инде!", тигән ҡурҡыу менән бергә үрелеп барҙы. Һөйләштәре телде һындырырлыҡ, тауыҡ көлдөрөрлөк булды ла, тамашаның бөтөн бәҫен ебәрҙе. Ә бит был ҡыҙҙар иң-иңдәре араһынан һайлап алынған, күпмелер ваҡыт күнекмәләр үткән. Ул күнекмәләр араһында башҡортса телмәрҙе үҫтереү, шымартыу дәрестәре лә алып барылһа, ҡатнашыусылар ҙа, ойоштороусылар ҙа отор ғына ине. Был бер миҫал ғына. Үкенескә күрә, йән әрнетер бындай күренештәр тулып ята. Телевидениела иртәнге "Сәләм" тапшырыуынан башлана тел һындырыуҙар, башҡорт театрҙарындағы киске спектаклдәрҙә дауам итә. Шулай һутлы, матур башҡорт тел һөйләшен ниндәйҙер йәнһеҙ телгә әйләндерә барабыҙ. Был юҫыҡта барыбыҙға ла - баҫма матбуғат журналистарына ла, телевидение, радио хәбәрселәренә лә, башҡорт тел ғилеме ғалимдарына ла, башҡорт теле уҡытыусыларына ла - бергәләп йыйылып, ниндәйҙер сара күрергә ваҡыт еткәндер, йәмәғәт?**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ДӨРӨҪЛӨКТӨ...

## тура ярып әйтергәме?



**"Мине ауылымда берәү ҙә яратмай. Дөрөҫлөк кемгә оҡшаһын инде? Мин бит кемдең кемлеген йөҙҙәренә бәреп әйтәм..." Бер апай осраған һайын миңә ошондайыраҡ хәбәр әйтмәйенсә үтмәй. Ә үҙе торғаны бер проблемалар йомғағы инде: ирҙәре менән йәшәй алманы, шуға иҫке генә донъяһын, мал-тыуарын, балаларын ыҙалыҡ менән көтә. Етмәһә, бәләкәй малайы аҡылға бер төрлө, был бала менән нисек яфаланыуҙарын һөйләп торғо ла килмәй. Ҡыҙы мәктәпте бөтөр-бөтмәҫтән низағ яраҡкан әсәһенән ялҡыпмы, оялыпмы, сит яҡҡа сығып ҡасты ла, бик һирәк кенә ҡайтып урай, унда ла тиҙерәк кире китеү яғын ҡарай (сөнки әсәһе уға ла "йүнһеҙлеген" күҙенә бәреп әйтә башлай).**

"Дөрөҫлөк ратһаң - яңғыҙлыҡты ла ярат" тип хаҡ әйтәләр: был апайҙың яҡындан аралашҡан кешеләрен һанау өсөн бер ҡулдың бармаҡтары ла етә. Шаяртып, "дөрөҫлөктө күтәрә белеүселәр" тип атайым мин уларҙы. Иҫәптәренә үҙем дә инәм. Был ханым телефон аша ла, урам уртаһында тотоп та минең хаҡта нимә уйлағанын, үҙе әйтмешләй, "үтемде һытҡансы" әйтеп киткәне бар. Әммә мин эстән, ул кисергәндәрҙең тамсыһын да күрергә яҙмаһын, шуға, ни тиклем ҡыйын булһа ла, ғәфү итергә кәрәк, тигән ҡағиҙәне ҡабул иткәнмен. Хәлемдән килгәнсе уға матди яҡтан да, тел менән дә ярҙам күрһәтергә тырышам. Үҙе ихлас, йомарт, алтын ҡуллы, уҡымаһа ла, күпте белгән ҡатын ул, ләкин уҫаллығы арҡаһында уның яҡшы сифаттары күренмәй ҙә ҡуя.

Ярай, ул апай үҙе асыуын оҙаҡ һаҡламай, ҡабат осраһа, һүҙ ҡуша ла, йәнә бер ни булмаған кеүек һөйләшәбеҙ ҙә китәбеҙ. Тик һәр һүҙемде уйлап, ауыҙымды үлсәп асырға тырышам: сөнки ул үҙенә дөрөҫлөктө әйткәнде яратып етмәй. Тағы ярһып, үҙенең һәр ваҡыт хаҡлы булыуын иҫбатларға тотона ла китә.

Бер ваҡыт, ҡыйыулығым етеп, дөрөҫлөктө күҙгә ҡарап әйтеү беҙ уйлағанса уҡ шәп нәмә түгел икәнен аңлатырға теләнем. "Мин дә һеҙҙең кеүек кешегә тура әйтә торғайным. Хатта "ошо телем булмаһа, күҙемде күптән ҡарға соҡор ине" тигән һүҙҙәр яраҡкан әйтемемә әйләнгәйне. Ләкин, йәшәй-йәшәй, дөрөҫлөк ҡайһы саҡ үҙеңә ҡаршы йүнәлтелгән ҡорал була икәнен аңланым..." - тип һөйләй башлауым булды, ул мине үҙен иң ҡәҙерле, иң изге нәмәһенән мәхрүм итергә йыйынған кеше кеүек күреп, ҡаршы ташланды. Баҡһаң, ул күңел яраларлыҡ, йөҙ йыртырлыҡ һүҙҙәрҙе әйтә белеүен үҙенә күрә бер мәртәбәгә, башҡаларҙа булмаған көс күрһәткесенә һанай икән дәһә! Бәй, шунан һуң үҙе дошмандарының күплегенә, берәү ҙә яңғыҙ, меҫкен ҡатынға ярҙам итергә теләмәүенә зарланып маташа.

Ундай дөрөҫлөк кәрәкме һуң? Һәр ваҡыт урынлымы, берәйһенә файҙа бармы? Кеше бит үҙе хаҡында тик яҡшы һүҙҙәр генә ишетергә теләй. Яман һүҙ менән күңелгә уңалмаҫ яра һалырға, хатта үлтерергә була. "Дөрөҫлөк әсе була инде ул, алдыҡ ҡына татлы", тип әйтергә ярата әлеге апай. Әммә "өндәшмәү - алтын" тигән аҡыллы һүҙҙәр ҙә бар. Ҡайһы саҡ ғәҙел кеше булыуыңа ҡарағанда, әҙәпле кеше булып ҡалыуың яҡшыраҡ түгелме ни? Әгәр кешегә етешһеҙлеген бик әйтергә кәрәк икән, уны алыҫтан уратып, кинонан, китаптан миҫал итеп килтереп, тупаҫлыҡҡа, ғәйепләүгә юл ҡуймай, йомшаҡ тонда еткереү күпкә тәьҫирлерәк. Унан килеп, дөрөҫлөк - ул шартлы төшөнсә, берәүҙең хәҡиҡәт үлсәмдәре икенсенеке менән тап килмәүе мөмкин, ундай саҡта һәр кем барыбер үҙен хаҡлы тип һанаясаҡ.

Ҡайһы саҡ теге апайҙан: "Тура әйтәм, тип, кешене күп рәнйетеүең арҡаһында үҙеңдең тормошоң ыңғайға бармай тип уйланғаның юҡмы?" - тип һорарға телем ҡысып ҡуя. Әммә ул барыбер аңламаясаҡ. Кешелә ғәйеп эҙләрҙән алда үҙеңдең дә тел тейҙергеһеҙ булырға кәрәклегеңде аңламаған кеүек...

**Рәхимә МУСИНА.**
**Әбйәлил районы.**

✓ *Йәһалмалыҡ комплекстар тыуҙыра бит ул, быға ҡаршы халыҡ интуитив рәүештә ҡаршылаша башлай. Ни өсөн ошо кешене яратмайым әле мин, сәбәбе лә юҡ, тип уйлай ул шунан. Барыһы ла ябай ғына - ихлас булыу ихласлыҡ тыуҙыра.*



*ИЖАДХАНА*

**Бөгөнгө башҡорт музыкаль шоу-бизнесы тураһында һүҙ йөрөткәндә мотлаҡ рәүештә Сәғиҙулла Байегетте телгә алыу ғәҙәти күренешкә әүерелгән. Ижад итә башлауының милли эстраданың барлыҡҡа килеү йылдарына тура килеп, был өлкәнең кире һәм ыңғай яҡтарын үҙенең елкәһендә татыған йырсының егерме йыл инде олоһоноң да, кесеһенең дә яратҡан ижадсыһы булып ҡала алыуының сере нимәлә? Тотошлай иҡтисади бәйләнештәргә генә ҡоролған шоу-бизнес башҡорт эстрадаһында ниндәй кимәлдә? Һәр йыл яҙ миҙгелендә Өфө ҡалаһы тамашасыһы өсөн концерттар ойоштороу йолаһына тоғро ҡалыусы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сәғиҙулла БАЙЕГЕТ сираттағы тамашаһы алдынан ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап бирә.**



# НИСЕК БАРМЫН...

## мин шулаймын

### Барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда

Иҡтисад ҡанундары хөкөм һөргән заманда милли сәнғәт тә үҙенсәлекле үҙгәреш кисерә, был кисектергеһеҙ күренеш. Миңә йыш ҡына башҡорт эстрадаһы, башҡорт шоу-бизнесы бармы ул, тигән һорауға яуап бирергә тура килә. Әлбиттә, бар, хатта ниндәйҙер кимәлдә көслө конкурентлыҡ та бар, тимәк, шоу-бизнес тигән төшөнсә беҙҙең миләткә ят түгел. Һәр береһенең төп эше булыуға ҡарамаҫтан, артистар төрлө ысулдар менән аҡса эшләү юлын таба, сөнки дәүләт бюджетына ғына ҡарап ултырып булмай бөгөнгө заманда һәм быны дөйөм үҙе лә аңлай. Баҙар системаһы мөнәсәбәттәрен, бәлки, һуңлабыраҡ аңлағанбыҙҙыр, шулай ҙа хәҙер ул беҙҙе тулыһынса үҙенә йәлеп иткән.

Аҡса эшләү өсөн шарттар юҡ, тиеүселәр иһә шул рәүешле үҙҙәренен яткаулығын, эшләргә теләмәгәнлеген аҡлап маташа. Ғөмүмән, тормошҡа бер туктауһыҙ зарланыусыларҙы мин йәлләйем генә. Шул уҡ башҡорт теленә бәйле хәлдәрҙе генә алайыҡ. Мин Өфөгә килгән замандарҙа мәрйә ҡарсыҡтары, шул ҡырағай телегеҙҙә һөйләшмәгеҙ әле, тип әрләп китә торғайны. Бөгөн, Аллаға шөкөр, рәхәтләнеп үҙ телебеҙҙә аралашабыҙ. Күп нәмә үҙеңдән тора, шуны аңлаһаҡ, зарланып ултырмаҫ инек. Балаларым менән магазинға инһәм, улар алдан йүгереп китә. Шунан улым ҡысҡыра: "Атай, туңдырма алайыммы?" Мин ишетһәм дә, юрамал: "Нимә тиһең, улым", - тием. "Туңдырма алайыммы?" - улым тағы ла магазинды яңғыратып ҡысҡыра. Һәр хәлдә, балаларым башҡорт телендә һөйләшергә һис тартынмай һәм уларҙы бер кем дә тыя алмай. Ана, аҡса эшләү өсөн Рәсәйгә килгән гастарбайтерҙар бер ҙә сит ерҙәмен тип тормай.

Беҙ, әлбиттә, тыйнаҡ халыҡ, шулай ҙа атай-олатайҙарҙан килгән тәрбиәгә икенсе күҙлектән ҡарарға ваҡыттыр, моғайын. Мәскәүҙә ГИТИС-та уҡыған саҡта беҙгә башлыса йәһүд профессорҙары белем бирҙе. Рәсәй тураһында һүҙ сыҡҡанда, ни өсөн Башҡортостан айырым дәүләт булып йәшәй алмай, тип һорай ҡуйҙыҡ. Беҙ икенсерәк яуап ишетергә теләгәнбеҙҙер, әммә профессор бик ябай итеп яуап бирҙе: "Нимә эшләйһең инде, тарихи йәһәттән шулай килеп сыҡҡан..." Тарихты үҙгәртә алмайбыҙ, әммә һәр заманда ла милләтебеҙҙең үҫеше өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра алабыҙ. Был беҙҙең һәр беребеҙҙең ҡулынан килә.

### Бизнестың шоуы ҡайҙа?

Шоу-бизнестың бизнес өлөшө үҫешә барһа ла, икенсе өлөшө - шоуы бик түбән кимәлдә, бының йәшерен-батырыны юҡ. Бөгөнгө көндә ниндәйҙер концерт ойоштороп, ҙур килем алыу мөмкин түгел, шуға ла уға күпләп сығым таһлаһаң да, ташламаһаң да артыҡ айырмаһы булмай. Шуға ла башҡарыусыларҙың 80-90 проценты концерттың кимәленә иғтибар бирмәй. Иғтибар итһәгеҙ, сәхнә биҙәлеше бер үк, мәҫәлән, һәр сара һайын ҙур экран ҡуялар, бер үк биҙәүселәргә мөрәжәғәт итеү тағы бер төрлөлөккә алып килә. Режиссер, ҡуйыусы эше лә аҡһай. Йырсының артында бейеүсе ҡыҙҙар, егеттәр бейеп йөрөүе ғәҙәти күренешкә әүерелде. Ҡайһы берҙә сәхнәлә музыканттар тора, тик уларҙың да "тере" тауышҡа уйнамауы ихтимал. "Арғымаҡ", "Бүреләр" кеүек төркөмдәр тамашасыны бер нисек тә алдай алмай, әлбиттә, әммә эстрадаға килгәндә, йышыраҡ күптәр алдан яҙҙырылған тауышҡа ғына ҡушылып тора.

Бер заман, йырсылар теле менән әйткәндә, плюсҡа йырлау бигерәк модаға инеп киткәйне. Һуңғы осорҙа күптәрҙең тере тауышҡа йырлауын күреп шатланам. Үҙем өсөн ысын тауышҡа йырлау оло ләззәт. Ижадымдың башланғыс осоронда, "Арҡайым" төркөмөндә йырлаған саҡта тик "тере" тауышҡа йырлай инек. Ҡобайырҙар, башҡа шуның кеүек үҙенсәлекле йырҙар башҡарып йөрөгәндән һуң, эстрадаға килеп ингәс, мин дә был шауҡымға эләгә биреп ҡуйҙым. Йә концертты телевидение төшөрә лә, сифат булһын өсөн, аранжировка өҫтөнән йырлауҙы һорай. Был уларға аҙаҡтан монтаж эшләп ултырмау өсөн кәрәктер инде. Ғөмүмән, хәҙерге замандa һәр кемебеҙ ике ҡуяндың ҡойроғон бер юлы тоторға інтыла.

Шоу-бизнестың үҫеше өсөн мөмкинлектәр күбәйһә лә, хәл итә торған мәсьәләләр ҙә байтаҡ. Мәҫәлән, продюсер мәктәптәре юҡ. Улайға китһә, сәнғәтме ул, сәнәғәт өлкәһеме, башҡа йүнәлешме, уларҙың һәр береһендә баҙар иҡтисадына көсәү башланғыс кимәлдә генә тора. Әлеге лә баяғы йәһүд ағай әйтмешләй, тарихи йәһәттән шулай килеп сыҡҡан. Бер нисә йыл эсендә генә Америка кимәленә етә алмаясаҡбыҙ, унан һуң, асылыбыҙ ҙа, хатта тәбиғәт шарттарыбыҙ ҙа икенсе бит.

### Талапсанлыҡ - уңыш нигеҙе

Шоу-бизнестың бер берәмеге булараҡ, ижадыма ҡағылышлы ҡайһы бер принциптарым да бар. Мәҫәлән, мин йыл һайын Өфөлә үҙемдең ҙур концертымды ойошторам һәм уны ижадыма имидж бирә торған сара тип атайым. Бындай концертҡа ҙур сығымдар түгәм, йышыраҡ килем сығымға ҡарағанда күпкә әҙ килеп сыға, быныһы минең өсөн бөтөнләй мөһим түгел. Был концерттың сюжеты ла була, уны профессиональ ҡуйыусы, профессиональ режиссер эшләй. Уның тамашасыһы саҡырып торған исеме лә була һәм был сараны телевидение төшөрөп, бар республика халҡына күрһәтә. Тимәк, һин үҙеңдең тамашасыңды ижадың менән таныштыраһың, эшеңде күрһәтәһең. Концерттың кимәле юғары булыуы минең өсөн төп шарт, шул саҡта тыңлаусыларың алдында йөҙөң дә яҡты була һәм уларҙан килгән ыңғай тойғолар һиңә кире әйләнеп ҡайта, бынан ҙур ҡәнәғәтләнеү алаһың. Үҙеңә, ижадыңа талапсанлыҡ та булырға тейеш.

Концертта халыҡ менән туранан-тура аралашам, кешене көлдөрәм, тип, бер ҡасан да билдән түбән юморға төшөп китмәйем - былар минең өсөн ят. Ысын мәғәнәһендә сәнғәт оҫтаһы булған кеше тамашасыны тәрбиәләргә тейеш. Был йәһәттән минең актер булыуым, театрҙа эшләүем ярҙам итә. Тормошомдо театрһыҙ күҙ алдына килтерә алмайым, ул мине ижади яҡтан үҫтерә. Театр коллективы тере организм икән, мин дә уның айырылғыһыҙ бер күҙәнәге. Шул уҡ ваҡытта унда үҙемдең тәҡдимдәремде, талаптарымды белдерә алам, сөнки минең үҙ фекерем бар. Йәштәр араһында ла шәхсән фекере булғандарҙы яратам. Йәштәр уйлы, фәһем булырға тейеш, шунһыҙ, милләттең киләсәге юҡ. Улар шулай уҡ аҡыллы ла булһын, юғиһә, ҡорал тотоп, майҙанға сығыу фажиғәле хәлдәргә килтереүе бар.

Шоу-бизнес тураһындағы һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтергә була: әгәр ҙә бөгөн йырсы йәки башҡа ижад кешеһе тәҡдим иткән хеҙмәткә аҡса түләргә әҙер булыусылар бар икән, күпмелер кимәлдә был өлкә үҫешкән, тик хәҙер уны юғарыраҡ, сифатлыраҡ үргә күтәреү өҫтөндә эшләргә кәрәк.

### Йыр - мәңгелек

Әле ҡасан ғына: "Эстрада - ул бер көнлөк", - тигән кешеләр бар ине. Был фекер менән бөтөнләй килешмәйем. Бына мин хәҙер егерме йыл сәхнәлә, был үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй. Йыр сәнғәте бер мәллек кенә түгел. Фидан Ғафаров менән Рим Хәсәновтың ижад иткән йырҙарын ғына иҫегеҙгә төшөрөгеҙ. "Өфө ҡалаһы ни өсөн матур?", "Етеғән шишмә" кеүек йырҙарҙы улымдың улы йырлаясаҡ әле! Бының шулай булырына икеләнмәйем дә хатта.

Минең "Тәпә" йырын, Рәстәм Ғиззәтуллиндың беренсе йырҙарын бер матбуғат баҫмаһында рәхәтләнеп тәнҡитләнеләр. Ун йыллап ваҡыт үткәс, яңы башҡарыусыларҙың йырҙарын ишетеп, Байегет менән Ғиззәтуллиндың йырҙары әле яҡшыраҡ булған икән, тип яҙҙылар. Заман бит алға бара, уның киләсәген күҙаллай ҙа белергә кәрәк. Береһен дә айырып әйткем килмәй, бөгөнгө көндә лә йәш йырсыларҙың үҙҙәренең йәшлек теләктәре, заманса ижадтары бар, уларға ғашиҡ булған ҡыҙҙар бар, уларҙы кумир тип иҫәпләйҙәр, уларға ҡушылып йырҙарын йырлайҙар. Имаһын камил, был ижадсыларҙың да, уларҙың тыңлаусыларының да күңелендә моң бар, башҡорт йырҙары уларҙың ҡанына һеңгән, ҡасан да булһа, улар ретро йырҙарҙы ла, халыҡ йырҙарын да тыңлай, йырлай башлаясаҡ.

### Егерме йыл сәхнәлә

Йылдағыса, баш ҡалала тышта яҙ миҙгеле хакимлыҡ иткән мәлдә ижади дуҫтар менән берлектә ҙур концерт ойошторасаҡмын. Ул сәхнәгә башлап сығыуыма егерме йыл тулыуға арналасаҡ. Быға тиклем булған концерттарыма Айдамир Мугу, Алла Духованың "Тодес" бейеү коллективын саҡырып, үҙемә һәм тамашасыма бүләктәр эшләгәнем булды. Ни өсөн әле Сәғиҙулла Байегет менән бер сәхнәлә, әйтәйек, Алла Пугачева, йәки Валерия, Дима Билан сығыш яһамаҫҡа тейеш? Баҙар иҡтисады заманында мөмкин булмаған бер нәмә юҡ, барыһын да аҡса хәл итә. Шулай ҙа быйыл ул тиклем кимәлдәге йондоҙҙар булмаһа ла, әле төрлө һөйләшеүҙәр алып барабыҙ, тамашасымды, ниндәйҙер сюрпризлар булыр, тип ышандыра алам. Абруйлы ҡунаҡтар менән бер рәттән, башҡорт эстрадаһына аяҡ баҫыусы йәштәр ҙә буласаҡ. Уларҙың әлегә концерт ойоштороп, халыҡ йыйырға мөмкинлектәре юҡ, шуға ла был йырсыларға бәләкәй генә булһа ла ярҙам күрһәтеүҙе үҙемдең бурысым иҫәпләйем.

Егерме йыл ижад итеү осоронда иңиң уңышлы ваҡыттарымды күрһәткем килә. Сибайҙа эшләгән дәүерҙән башлап, бөгөнгө көнгә тиклем башҡарған йырҙарым яңғырар, моғайын. Күптән башҡармаған йырҙарымды, шул уҡ "Тәпә", Рәйес Түләк һүҙҙәренә яҙылған "Шәүрә" кеүек йырҙарҙы, Дим Мәнһәндең "Нисек барһың, тик шулай бул" йырҙарын да тамашасы һағынып бөткән. Әйткәндәй, ана шул нисек бармын, шулай була белеүемде тамашасы ифрат ярата. Тормошта мин ниндәй, сәхнәлә лә шулай. Бер ҡасан да улар менән яһалма һаулыҡ һорашмайым, яһалма йылмаймайым. Яһалмалыҡ комплекстар тыуҙыра бит ул, быға ҡаршы халыҡ интуитив рәүештә ҡаршылаша башлай. Ни өсөн ошо кешене яратмайым әле мин, сәбәбе лә юҡ, тип уйлай ул шунан. Барыһы ла ябай ғына - ихлас булыу ихласлыҡ тыуҙыра.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шулай ҙа бөгөнгө заман кешеһенең төп бәләһе - үҙгәрештәргә әҙер булмауы ғына түгел, уларға аяҡ терәп ҡаршылашыуылыр ул, моғайын. Ихлас кеше донъя, заман, әйләнә-тирәһендәге кешеләр алып килгән һәр нәмәгә, һәр яңылыҡҡа асыҡ була, тимәк, Сәғиҙулла әйткән ихласлыҡтың донъябыҙҙы, милли мөхитебеҙҙе камил дәрәжәгә еткереү, үҙебеҙҙе уңышлы итеү һәләте бар. Һәр хәлдә, уңышлы кешенән ыңғай энергия йөктороп ҡайтырға ниәтләнһәгеҙ, "Егерме йыл сәхнәләргә сыға, тәпәш кенә бер егет" программаһына рәхим итегеҙ. Ул бер генә көн - 23 март Ҡала мәҙәниәт һарайында үтәсәк.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**Баш ҡалала әле күптән түгел генә асылған "ВДНХ-ЭКСПО" күргәҙмә комплексында "Арт - Уфа. Һөнәрҙәр. Сувенирҙар" тип аталған күргәҙмә-фестиваль үтте. Унда республиканың 16 ҡала-районынан, күрше өлкәләрҙән 100-ҙән ашыу кеше, ойошма ҡатнашты. Халыҡ кәсептәре һәм сувенир етештереү менән шөғөлләнеүсе оҫталар өфөләләргә үҙҙәренең оҫталыҡ емештәрен: ағас, туҡыма, таш, быяланан эшләнгән һәм башҡа төрлө тауарҙар тәҡдим итте. Ойоштороусылар билдәләүенсә, сараның төп маҡсаты - халыҡ кәсептәрен һәм һөнәрҙәрен популярлаштырыу; оҫталар етештергән тауарҙарҙы Рәсәй һәм донъя баҙарына сығарыу; ошо продукция нигеҙендә киләһе йылда үтәсәк ШОС һәм БРИКС илдәре саммитына килгән ҡунаҡтарға бүләк кәрзине булдырыу. Шулай уҡ күргәҙмә-фестиваль сиктәрендә эшлекле һөйләшеүҙәр ҙә ойошторолдо. Уларҙа халыҡ кәсептәренең бөгөнгө хәле, уны һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды. Белгестәр халыҡ кәсептәрен, йолаларын һаҡлау буйынса закондар кәрәклегенә лә туҡталып китте. Бынан тыш, йәш быуынға оҫталыҡ серҙәрен өйрәтеү маҡсатында мастер-кластар ҙа үткәрелде. Күргәҙмәлә ҡатнашыусылар менән һөйләшәбеҙ:**

# ҠУНАҠТАРҒА...

## бүләктең ҡайһыһы оҡшар?



**Рәүилә Лоҡманова, Сәйетбаба башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге методисы:** Был күргәҙмәгә беҙ Рәбиғә апай Йәрмиева һуҡҡан аҫалы башҡорт балаҫтарын килтерҙек. Шулай уҡ балаҫ һуғыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре лә күрһәттек. Балаҫтарҙан тыш, күргәҙмәлә музыкаль инструменттар: дөңгөр, ҡыл-ҡумыҙ, думбыра кеүек уйын ҡоралдарын да тәҡдим иттек. Күргәҙмә-йәрминкәләрҙә йыш ҡатнашабыҙ. Шуға күрә лә беҙҙе белеп, танып торалар. Эштәребеҙ халыҡтың күңелен яуланы инде. Бигерәк тә Рәбиға апайҙың балаҫтары ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Ауылыбыҙҙа һуңғы йылдарҙа уның тырышлығы менән балаҫ һуғыу эше киң ҡолас йәйҙе. 6 станок эшләтеп алдыҡ. Бер нисә ҡатын-ҡыҙ балаҫ һуғыу серҙәренә өйрәнде. Мәктәптә хеҙмәт дәрестәрендә уҡыусы ҡыҙҙарға ошо боронғо һөнәр өйрәтелә. Бына шулай халҡыбыҙҙың матур шөғөлө үҫешә, бер аҙ юғала яҙғандан һуң ҡабаттан тергеҙелә. Саммитҡа килгән сит ил ҡунаҡтарына башҡорт тарихын, мәҙәниәтен, йолаларын сағылдырған музыка ҡоралдары, ҡул эштәре иң ҙур бүләк булыр, тигән уйҙа беҙ.

**Фәнүзә Яубаҫарова, Ейәнсура районы Үтәгол ауылы:** Атайҙан күргән уҡ юнған, әсәйҙән күргән тун бескән, ти халыҡ мәҡәле. Мин дә әсәйемдән күреп 13 йәштән шәл бәйләй башланым. 90-сы йылдарҙа, аҡса булмай киткән замандарҙа бигерәк тә кәрәге тейҙе был шөғөлдән. Әле лә буш ултырған юҡ, шәлебеҙҙе һораусылар күп. Һәр шәмбе Ҡыуандыҡ баҙарына барып та һатып киләм. Төрлөсә биҙәп, семәрләп, яҙыуҙар менән бәйләйем. Ҡыҙым миңә ярҙам итә. Дебеткә ҡытлыҡ юҡ, үҙебеҙ күпләп кәзә тотабыҙ. Халҡыбыҙҙың булмышын асҡан әйберҙәр менән бергә, башҡорт шәлдәре лә ҡунаҡтарға бүләк ителәсәк теҙмәлә булыр, тип ышанғы килә.

**Юлай Хәлитов, Көйөргәҙе районы:** Ағас эштәре менән 2009 йылда шөғөлләнә башланым. Атайым балта оҫтаһы, яҡын-тирәлә билдәле һөнәрмән булһа ла, ошоға тиклем был шөғөлгә ныҡлап тотонған юҡ ине. Ағастан эшләнгән әйберҙәргә һорау ҙур бит хәҙер. Башлыса заказдар буйынса эшләйем. Ултырғыс, өҫтәл кеүек өй кәрәк-яраҡтары, кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарға һандыҡтар, хужабикәләргә гөл һауыттары - иң ҙур һорау менән файҙаланған әйберҙәр. Бөгөн инде был минең яратҡан эшем генә түгел, төп килем сығанағым да. Бәләкәй улым да минең эҙемдән китте. Ул төрлө сувенирҙар эшләй, минең беренсе ярҙамсым. Япраҡ ҡына улым Күмертау ҡалаһында үткән олимпиадала үҙе эшләгән яхта-сувенир менән беренсе урын алды.

**Гөлназ Сурина, Хәйбулла районы Бәләкәй Арыҫлангол (Вәзәм) ауылы:** Вәзәм шәл һуғыу клубы 2013 йылдың сентябрендә эшен башланы. Шәл һуғыу идеяһын беҙгә билдәле яҡташыбыҙ Сәрүәр Сурина тәҡдим иткәйне. Тәҡдим ҡатын-ҡыҙҙарға оҡшап ҡалды. Ике станок эшләтеп алдыҡ, өсөнсөһө эшләнеп бөтөп килә. Һәр кис ауыл клубында урта йәштәрҙәге 11 ҡатын-ҡыҙ йыйылып, кәзә дебетенән шәл һуғабыҙ. Халҡыбыҙға хас боронғо шөғөлөбөҙҙө тергеҙәбеҙ, тиһәк тә була инде. Шәл һуғыу серҙәрен аҙымлап-аҙымлап өйрәндек. Ауылыбыҙ Ейәнсура районына яҡын булғас, был эште белгән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа бар. Шулай уҡ Әбйәлил районынан Рәсилә Вәлиева килеп өйрәтеп китте. Әле лә уның менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Һуғылған шәлдәрҙе һатабыҙ, заказдар ҙа килеп тора. Ысынлап та, башҡорт халҡының саммитҡа килгән юғары дәрәжәләге ҡунаҡтарға бүләк итә алырҙай нәмәләре күп ул. Тейешле ярҙам, теләктәшлек булғанда ошо кәсептәрҙе йәйелдереп ебәреү артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырмаҫ ине, тип уйлайым. Үҙ сиратында ауылдарҙа йәшәгән кешеләргә лә өндәшке киләм. Буш ваҡытты дөрөҫ ҡулланырға, аҡсаһыҙлыҡ мәсьәләһен хәл итеү мөмкинлектәрен файҙаланырға кәрәк.

**Асия Гәйнуллина, Сибай ҡалаһы:** Күргәҙмә-конкурстарҙа беренсе тапҡыр ҡатнашыуыбыҙ түгел. Быға тиклем милли кейемдәр коллекцияһы менән республика кимәлендә лә сығыш яһаныҡ, шулай уҡ Алабуға, Санкт-Петербург ҡалаларына, Ҡаҙағстанға барҙыҡ. Был күргәҙмә-фестивалгә башҡорт милли кейеменең төрлө биҙәктәрен - селтәр, арҡыры яға, хәтисәнең бер нисә төрө, шулай уҡ тегелеп һәм һәлберәтеп эшләнгән ҡашмауҙар, сулпы, сәсмәүҙәр алып килдек. "Ете ҡыҙ" этнографик һәм матурлыҡ студияһы теккән күлдәктәр ҙә ҡуйылды күргәҙмәгә. Сараның икенсе көнөндә "Ете ҡыҙ"ҙың ҡыҙҙары башҡорт кейемдәрен подиумда күрһәтте. Сибай ҡалаһы "Агинәйҙәр ҡоро"ноң да эштәре күргәҙмәлә урын алды. Беҙ кейем менән генә туҡталып ҡалманыҡ. Өфө халҡы иғтибарына тамғалы, ҡусҡар менән эшләнгән буй кейеҙҙәрҙе, ҡораманан эшләнгән арҡыры, буй юрғандарҙы күрһәттек. Ғөмүмән, ҡораманан эшләнгән ике композиция алып килдек. Бынан тыш, ысын күндән эшләнгән ҡатын-ҡыҙ сумкалары, янсыҡтар ҙа күргәҙмәбеҙҙә урын алды.

Күргәҙмәгә билдәле модельер Вячеслав Зайцев та килгәйне. Уға беҙ теккән башҡорт кейемдәре оҡшаны. Модельер һәр биҙәк, һәр аксессуар менән ныҡлап ҡыҙыҡһынды, һәр береһе хаҡында ентекләп һорашты. Уға кейемдәрҙең һәр элементының, биҙәгенең асылын аңлатырға тырыштыҡ. Зайцев башҡорт милли кейеме нигеҙендә хәҙерге заман ҡатын-ҡыҙ кейемен тегергә ниәтләнеүе хаҡында ла белдерҙе.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

# ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙЕК ЙӘШТӘРГӘ

**Йәш йырсы Радик Юльяҡшин: "Ашҡынма, ғүмер, туҡта, уҙма һин, ...Иманлыҡ беҙҙә ташлап китмәһен" - тип йырлағанда телевидение операторы камераһын күберәк залдағы тамашасыларҙың йөҙҙәренә йүнәлтте. Ул йөҙҙәрҙә әрнеү хисен дә, күҙ йәштәрен дә күреп, имандың, ғәҙеллектең өмөт, хыял ғына булып ҡала барыуын аңлаусылар ултыра, ахыры, был концерт залында, тип уйлап ҡуйҙым...**

...Күп йылдар элек бер актрисаның: "Мәктәпте тамамланыҡ та, Мәскәүгә уҡырға киттек. Унда беҙҙе бер төркөм һәйбәт кешеләр ҡаршыланы, биш йыл буйы шул кешеләр араһында ҡурсаланып йәшәнек..." - тип һөйләгәне бер ҙә онотолмай. Үҙемдең үҫмер йылдарымды иҫемә төшөрөп, ҡалай дөрөҫ һүҙҙәр әйтте был апай, тип уйлағайным шул саҡта. Ысынлап та, һәйбәт кешеләр уратып алғайны беҙҙе лә Мәскәүгә уҡырға баргас. Кеше бер-береһенә иғтибарлы, ярҙамсыл ине. Әлбиттә, Мәскәү кешеләре араһында уҫалдар ҙа булғандыр, тик яуызлыҡ улай уҡ өҫтөбөҙгә ябырылып барманы. Халыҡтың аңына яҡшылыҡ, дуҫлыҡ, йомартлыҡ һеңдерелгән заман булғандыр...

Ә хәҙер телевизорҙы асып булмай - гел ҡан ҡойош, шартлау, үлтереш, яуызлыҡ. Халыҡ ятатҡан илен юғалтты, яңы төҙөлөүсе илде ҡабул итә алмай, баҙап ҡалды. "Ниндәй илдең патриоты булырға һуң?" - тип уйланабыҙ. Бөтә ҡағыҙҙарҙан "Совет иле" тигән һүҙҙәрҙе һыҙып ташлап ҡына халыҡтың хәтерен үҙгәртеп булмай шул. Замандаштар менән аралашһаң: "Коммунизмда йәшәгәнбеҙ икән..." - тип әйтеүселәр ҙә бар. Әлбиттә, замандаштар матди коммунизмды түгел, ә рухи коммунизмды күҙ уңында тота. Әйткәндәй, һуңғы көндәрҙә Ленинград блокадаһы тураһындағы хәтерҙе яңыртыуға арналған тапшырыуҙар күп күрһәтелде. "Яңылыҡтар" тапшырыуында В.В.Путиндың блокада кисереүселәр ойошмаһы ағзалары менән осрашыуын ҡараным һәм бер нәмәгә аптыраным. Ул ойошманың етәксеһе: "Блокаданы "Совет ғәскәрҙәре" йырып сыҡты, тигән һөйләмдән "совет" һүҙен алып ташлап, "Рәсәй ғәскәре" тип яҙырға кәрәк", - тип хәбәр һалды. Ялағайлыҡ сәскә атып, иң ғәзиз ойошмаларға ла үтеп ингән икән, тип аңланым мин быны. Хәйер, ялағайлыҡ ҡына түгел, үҙ тарихыңды белмәү, үҙ тарихыңды инҡар итеү ҙә инде был.

Бер көндө танышым әлегерәк үҙе менән булған шундай ваҡиға тураһында һөйләне: "Миңә 30-33 йәш тирәһе булғандыр. Бер саҡ автобусҡа индем дә, оҙон буйлы бер егет янына барып баҫтым. Бәләкәй генә буйлымын, тегә егеттең ҡултыҡ аҫтынан ғынамын. Ул егет шаяртырға уйлағандыр инде - минең иңемә терһәген һалды. Егеткә әйләнеп ҡарамай ғына, яҡындағылар ишетерлек итеп: "Һеҙгә уңайлымы?"- тип һораным. "Әйе, үҙегеҙ ғәйепле, үҫмәгәнһегеҙ бит", - тип яуапланы егет тә миңә ҡарамай ғына. "Үҫеп булманы шул, 41-се һуғыш йылында тыуып, бала сағым аслыҡҡа тура килде бит", - тип әйтеүем булды, егет терһәген ала һалды. "Әҙәм затын дауам иттерергә ярап ҡалдыҡ шулай ҙа", тигән һүҙҙәремде, боролоп, ул егеттең йөҙөнә ҡарап әйттем. Шул саҡ егет эргәбеҙҙә ирәйеп ултырған егетте елтерәтеп торғоҙҙо ла, ултырғысҡа мине ултыртты. Уның йөҙө ҡыҙарып киткән, ә күҙҙәрендә йәш бөртөктәре йылтырай ине. "Һуғышта, аслыҡта тыуғандарға айырым хөрмәт күрһәтергә тейешбеҙ!" - тине ул ҡысҡырып, минән ғәфү үтенде һәм киләһе туҡталышта автобустан төшөп ҡалды..."

Бына шулай, йәштәрҙең дә төрлөһө бар. Беҙ уларҙы, йәштәр илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың һуғыш, аслыҡ, емереклек тигән ҡайғыларҙы үтеүен онотоп шашына, тип ғәйепләйбеҙ ҙә ул. Беҙ һөйләмәгәс, улар уны ҡайҙан белһен? Күп тапҡырҙар һөйләргә, иҫтәренә төшөрөргә кәрәк. Бигерәк тә Мәскәү урамдарында, теләһә нимдәй яҙыуҙар күтәреп, ғауғасылар аҡсаһына һатылып йөрөүсе йәштәрҙең иҫтәренә төшөрөргә кәрәк ил тарихын. 1941-1945 йылдарҙы үтеп, фашизмды еңгән данлы бөйөк 9 Майҙа ғына түгел, йыл әйләнәһенә һөйләйек йәштәргә, балаларға. Ошо батырлыҡ тарихын белһә, үҙ илен һөйһә, уның үҫешенә бөтә тырышлығын бағышлап йәшәйәсәк улар ҙа. Һәр хәлдә, шуға ышанғы килә.

**Айгөл АХУНОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҘ ЙӘШЕНЕҢ...

## ыңғай яғы бар

■ Стокгольм (Швеция) университеты ғалимдары раҫлауынса, ҡатыны аҡыллы булған ир-егеттәрҙең ғүмере оҙайлыраҡ була. Интеллект кимәле юғары ҡатын-ҡыҙ ғаилә ағзаларының сәләмәтлеген дә ҡайғырта, улар дөрөҫ туҡлана, әгәр ҙә ире йәки балалары ауырып китә икән, былдай ҡатын тиҙ генә ауырыуҙы дауалай һала. Һынауҙарҙа 1,5 млн ир-егет ҡатнаша, асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙҙың аҡыллы булыуы уның үҙенең ғүмер оҙайлығына тәьҫир итмәһә лә, иренең һаулығы һәм нисә йәш йәшәйәсәге тап ҡатын-ҡыҙ ҡулында. Бәхетле ғаиләләрҙә ирҙәрҙең физик сәләмәтлеге генә түгел, ә психик торошо ла яҡшы. Америка ғалимдары раҫлауынса, улар депрессияға, стресҡа, суицидҡа һирәгерәк бирелә, алкоголизм һәм наркомания уларға бөтөнләй янамай. Былдай ир-егеттәр йәмғиәттә лә тотороҡло урын билдәләй.

■ Илап күҙ сығарып булһа ла, проблемаларҙы хәл итеп булмай, тигән фекерҙе табиптар кире ҡаға. Илау сәләмәтлеккә ныҡ ярҙам итә ала, тип иҫәпләй Миннесота (АҠШ) һәм Ланкастер (Бөйөк Британия) ғалимдары. Улар илауҙың физиологик тәьҫирен өйрәнгән һәм стрестың организмдан күҙ йәше менән сығыуын раҫлаған. Ауыр саҡта илап барған кешеләрҙең 88,8 проценты балауыҙ һығып алғандан һуң еңеллек тоя икән. Күҙ йәше менән организмдан йөрәк өйәнәгенә килтереүсе матдәләр сыға, икенсенән, илаған саҡта кеше тәрән итеп тын ала, был үҙ сиратында кортизол - стресс гормоны кимәлен түбәнәйтә.

■ Организм дөрөҫ эшләһен өсөн көн тәртибе лә мөһим роль уйнай. Дөрөҫ туҡланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душҡа барығыҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндөҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар кәйефтән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән. Бәктиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше борсолоу тойғолары кисерә. Үҙе лә һиҙмәҫтән, стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы продукттарҙы күберәк ҡуллана башлай. Былдай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иҫе лә китмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Президент һайлау кампанияһы мәлендә итисади хәлдәрҙең насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнелә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыктыҙ ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тиңләй. Шуға ла кемегеҙ артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - тип билдәләй профессор Джулиано Ларан.

УЙЛЫҒА - УЙ

**Балиғ булған балаларҙы өйләндереү элек-электән килгән сауаплы, изге эш һаналған. Шуға ла уларҙы башлы-күҙле итеү бурысын һәр ата-әсә лайыҡлы итеп, урын еренә еткереп үтәргә тырыша. Әлбиттә, туй табынын күңел асыу өсөн генә йыймайҙар. Уның маҡсаты - йәштәрҙең ир һәм ҡатын булыуын бөтәһе алдында ла тантаналы иғлан итеү, шуның менән улар иҥенә яуаплылыҡ тойғоһо һалыу һәм никах бурыстарын йөкмәтеү ҙә. Туйға йыйылған ҡунаҡтар ҙа матур теләктәре, изге кәңәштәре менән йәштәргә ғаилә тормошоноң етди һынау икәнен, никахтың тормошта бер тапҡыр ғына ҡабатланырға тейеш изге ғәмәл булыуын аңлатырға тейеш. Буласаҡ ир һәм ҡатын туйҙа теләнгән теләктәрҙе аҡларға, ата-әсәһе йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә бурыслы. Ғөмүмән, туй - никахлашыу һәм ғаилә ҡороу уңайынан башҡарылған бурыстар һәм йолалар йыйылмаһы ул. Уны үткәргәндә борон-борондан һәр милләт үҙ гөрөф-ғәҙәтенә, йолаларына таянған. Бөгөн ошо йолалар, бурыстар теүәл үтәләме?**



# ТУЙ ЙОЛАҺЫ НИСЕК АТҠАРЫЛА,

## сит ҡалыптамы, үҙебеҙсәме?

### Заманса, тигән булалар ҙа ул...

Күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, хәҙер өйләнешеү йолалары күп төрлөгә әйләнә бара. Егет менән ҡыҙҙың берәүгә лә белдермәй, никахтарын рәсми теркәп тормай ғына ир менән ҡатын булып йәшәү күренештәре лә барлығын иҫәпкә алмағанда, ике яҡтың да ата-әсәйҙәре үҙ-ара килешеп, ҡунаҡ саҡырып, мәжлес ҡороп туй үткәреү йолаһы нигеҙҙә һаҡлана. Әммә... Үҙебеҙҙең гөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, йолаларыбыҙҙы хушһынмай, Европа стиленә эйәргәнебеҙҙе лә һиҙмәй ҡалғанбыҙ икән. Туйҙарҙы берәүҙекенә лә оҡшамағанса, үҙенсәлекле итеп үткәрергә тырышыу модаһы ошонан килә лә инде. Шулай туй мәжлесе ата-әсәнән ҙур сығымдар түктереп, мотлаҡ ресторан, кафеларҙа тамада, музыканттар яллап, шаулатып үткәрелә. Видеоға төшөрөү ҙә заманса туйҙарҙың бер талабы бөгөн. Халыҡ та йәштәрҙән был ғәләмәттәренә күнегеп бөткән. Шуға күрә лә туй кортежының урам буйлап, лимузиндарҙа, биҙәлгән автомашиналарҙа геү килеп үтеп китеүенә лә хәҙер бер кем дә ауыҙ асып шаҡ ҡатмай. Туйҙа ҡатнашҡан егет һәм ҡыҙҙарҙың бер иштән кейенеүе лә, фейерверк аттырыуҙары, иҫтәлекле урындарҙа бикле йоҙаҡ ҡалдырыуҙары ла ғәжәпләндермәй. Туйға төшкән аҡса ошондай мәжлес үткәреүгә сарыф ителмәй, ә өйләнешкән йәштәрҙең ҡулына бирелә, йәнәһе, "эшләп тапҡандар". Йәштәр шул аҡсаға дингеҙ буйында "баллы ай" үткәрә йәиһә затлы машина, аҡыллыраҡтары фатир һатып ала.

Тик шуныһы үкенесле, шулай ҙурҙан ҡубып, үҙҙәре теләгәнсә ҡыланды-рып өйләнешкән йәштәрҙең ғаилә тормошо күп осраҡта туйға һалынған сығымды аҡламай. Рәсәйҙең айырылышыуҙар буйынса Европанан ҡала икенсе урында тороуын иғтибарға алһаҡ, ахырыһы, йәштәребеҙ был осраҡта ла сит ил ҡалыбынан ҡалышмаҫҡа тырыша. Бер-ике йыл элек демографтар айырылышыуҙарҙың төп сәбәбен иртә өйләнеү, тәүге баланы иртә табыу менән аңлатырға тырышты. Тик былтырғы мәғлүмәттәрҙе күргәс, йәғни Башҡортостанда кәләштәрҙең уртаса йәше 25-30, ә кейәүҙәрҙеке 28-34-кә етеүен белгәс, сәбәптең бында ғына булмауын аңлайһың. Шуныһы ла ғәжәпләндерә, хәҙерге ҡайһы бер кәләштәр ирҙәренең фамилияһына күсеүҙән ҡырҡа баш тарта икән. Был иһә, заман ҡатын-ҡыҙҙарының ирҙәргә баш бирмәҫкә, һәр ҡайҙа ла үҙе алдан булырға тырышыуына тағы ла бер асыҡ миҫал булып тора. Ҡатындар эреләнгәнме, әллә инде ирҙәр ваҡланғанмы икәнен аңлап ҡара шунан...

### Һалым ғына һаҡлармы?

Сит ил ҡалыбына эйәреү ғәҙәте закондар сығарғанда ла үҙен белгертмәй ҡалмай. Былтыр көҙ Дәүләт Думаһы депутаттары, айырылышҡан осраҡта дәүләт пошлинаһын 400 һумдан 30 мең һумға тиклем арттырырға, тигән тәҡдим индерҙе. Был идея ил башлығы Владимир Путинға ла оҡшап ҡалғайны. Адвокат Сергей Жорин: "Европала никахты тарҡатыу күпкә ҡатмарлы процесс һанала. Беҙгә лә улар өлгөһөнә эйәрергә кәрәк, сөнки күптәр ҡыҙған баш менән айырылышыу ға ғариза бирә. Рәсми ауырлыҡтар етди аҙым яһар алдынан тағы бер тапҡыр уйларға мәжбүр итәсәк. Шуға ла күтәрелгән идеяның перспективаһы ҙур. Уны никахты теркәгәндә лә файҙаланыу отошло буласаҡ", - ти. Был тәҡдимде РФ Хөкүмәте вице-премьеры Ольга Голодец та хуплай һәм һалымдан килгән аҡсаны алимент түләмәүселәргә балаларына күсерергә тәҡдим итә. Уның һүҙҙәрен Валентина Матвиенко ла элеп алды һәм: "Айырылышыу - етди эш. Шуны белеп тә өйләнәләр икән, айырылышҡан осраҡта 30 мең һум түләттерергә лә була", - тине. Рәсәй Премьер-министры Дмитрий Медведев иһә һалымдарҙы хөкүмәт инициативаһы менән генә күтәреп булмауын билдәләп, бөтә ыңғай һәм кире яҡтарҙы, йөмәғәтселек фекерен иҫәпкә алырға, эксперт берләшмәһе менән кәңәшләшергә саҡырҙы. Әҙ килемле граждандар өсөн был һалымдың үтә ҙур булыуын белдереүселәргә ҡарата: "Шуның өсөн, өйләнешкән саҡта уҡ башты эшләтергә, айырылышыуҙың өйләнешеүгә ҡарағанда ла сығымлыраҡ булыуын уйларға кәрәк. Әлбиттә, был сара демо-

ӘЙҘӘГЕҘ...

# МӘРХӘМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Шәфҡәт, мәрхәмәт йәғни рәхимлек кешене биҙәгән матур холоҡтарҙың береһе. Бынан тыш, улар донъяла гармониялылыҡты һаҡлап тороусы сифаттар. Рәхимлек изге эштәргә этәрә, йәлләү, башҡаларға ярҙам күрһәтеү, ғәфү итеү, йомшаҡ мөғәмәләнең нигеҙе булып тора. Рәхим - Аллаһы Тәғәләнең күркәм исемдәренең береһе лә.**

Кешелек донъяла йәшәүенең күп өлөшөн социаль тетрәнеүҙәрҙә, низағтарҙа үткәрә. Һуғыштарға килтергән сәйәси бәхәстәрҙе, бер дәүләттән, халыҡтың икенселәрҙе юҡҡа сығарырға тырышыуын тарих китабының һәр битендә осратырға була. Бөгөн дә донъяның күп нөктәләрендә дошманлыҡ алға һөрәлә, шул арҡала ҡан ҡойола. Бер кеше икенсеһен күрә алмай. Саҡ ҡына кеҫләрәктәр көсһөҙөрәктәрҙе түбәнһетә, танау аҫтынан ҡарай. Ә ни өсөн кешеләрҙә бер-береһен аңларға тырышыу, килешеүсәнлек юҡ? Сөнки йәмғиәттә шәфҡәт, рәхимлек етешмәй.

Үҙең кеүек уйламағандарҙы дошман күреү, үҙ хоҡуҡтарыңды ғына таныу, ерҙәге ниғмәттәргә үҙеңдең генә хужа булырға тырышыуың яҡты киләсәккә өмөт бирәме? Йыш ҡына кеше үҙенең шәфҡәт ышығына ҡаны, ҡараштары менән яҡын булғандарҙы ғына ала. Ләкин был ғына әҙ. Бер ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәр сәхәбәләренә: "Кем кешеләргә ҡарата рәхимле булмаясаҡ, Аллаһы Тәғәлә уға ҡарата Рәхимле булмаясаҡ", - тип әйтә. Сәхәбәләр: "Беҙ бит былай ҙа рәхимле", - тип яуаплай. "Яҡындарыңа ҡарата ғына мәрхәмәтлек - мәрхәмәтлек түгел, бөтә кешеләргә ҡарата мәрхәмәтле булырға кәрәк",- ти Мөхәммәт бәйғәмбәр.

график хәлде яҡшыртмаясаҡ. Совет заманында балаһыҙ ғаиләләргә һалым һалыу ҙа тыуымды арттырманы бит, ә дәүләт һалым түләтеүен дауам итте", - тип яуап бирҙе Премьер-министр.

Эйе, халыҡҡа төрлө һалымдар һалыу элек-электән килә. Мәҫәлән, буйҙаҡтарға һәм балаһыҙ ғаиләләргә 1941 йылда уҡ һалым һалына башлай. 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге балаһыҙ ирҙәргә һәм ирҙә булған 18 йәштән 45 йәшкә тиклемге ҡатындарға эш хаҡының 6 проценты күләмендә һалым түләттерелә. Был һалым 1992 йылда юҡҡа сығарыла. Шулай ҙа уны, бөтөнләй бөтөрөлдө, тип әйтеүҙәре дөрөҫ түгел, сөнки ул әле лә бар һәм Балаларға стандарт һалым ҡайтармаһы тип атап йөрөтөлә. Ошоға ярашлы, балаһыҙ кешеләр 182 һумға күберәк һалым түләй ҙә инде.

Сенаторҙарҙың 30 мең һум һалым түләтеү тәҡдименә төрлө фекерҙәр белдерелде. Владимир Путиндың ҙур һалым түләмәй генә алдан айырылып өлгөрөүенә төрттөрөүселәр ҙә, туйға төшкән аҡсаны тотонмай, айырылышыу өсөн һалып ҡуйырға тәҡдим итеүселәр ҙә табылды. "Зәңгәрҙәргә" ҡаршы закондың авторы, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Елена Мизулина иһә, 30 мең һумлыҡ һалым индереүгә ҡырҡа ҡаршы сығыш яһаны. "Был закондың өҫтәмә проблемалар тыуҙырыуҙан башҡа бер файҙаһы ла юҡ. Шуға күрә 500-1000 һум штраф түләһәләр, шул еткән", - тине ул. Ә адвокат Кирилл Бельский иһә, һәр инициативаның практик маҡсаты булырға тейеш, был тәҡдимде айырылышыуҙар һанын кәметеү сараһы булараҡ ҡына ҡабул итергә була, шунан башҡа ул бер нисек тә нигеҙләнмәгән, тип һанай.

Илдәге уртаса эш хаҡының йәшәү минимумынан да түбән булыуын иҫәпкә алһаҡ, 30 мең һум һалым - күптәрҙең ярты йыллыҡ эш хаҡы икәне яҡшы аңлашылалыр. Шуға күрә, уртаса килемгә эйә булған ябай кешеләр генә түгел, бюджет өлкәһендә эшләүселәр ҙә, пенсионерҙар ҙа никахын рәсми тарҡатыуға еңел генә бара алмаясаҡ. Әммә һуңғы йылдарҙа граждандар никахы менән генә йәшәүҙе хуп күргәндәр күбәйгәндә, бындай закон сығарыуҙы уйланмаған аҙым тиергә лә булалыр. Сөнки был граждандар никахының, законһыҙ тыуыусы балалар һанының күбәйеүенә лә килтереүе ихтимал. Әлбиттә, эт менән бесәй кеүек йәшәгәндәрҙе һалым ҡурҡытмаясаҡ. Бары тик улар бергә йәшәмәүҙең башҡа юлдарын табасаҡ. Нимә генә тиһәк тә, һалым тураһындағы тәҡдимдәр былай ҙа ныҡ булмаған ғаилә институты нигеҙенә етди хәүеф тыуҙыра.

Һүҙ ҙә юҡ, һалымдар ҡаҙнабыҙҙы тулыландыра. Шуға күрә, төрлө һалымдар уйлап сығарып, уны байытырға тырышыуҙарына ғәжәпләнергә лә кәрәкмәйҙер. Үкенескә күрә, төп һалым түләүселәр булып илебеҙҙең ябай граждандары тора, ә миллиардтар менән эш иткән байҙар ҡатламы ситтә, күләгәлә ҡала бирә. Һуңғыларының күбәйеүе арҡаһында тейешенсә йыйылып бөтөлмәгән һалым был базаны киңәйтеүҙе талап итә. Һалымдарҙың ҙур һәм күп булыуы сәбәпле, ҡайһы бер хәйләкәр граждандар унан ҡасыу юлдарын эҙләй башлай. Был юлды ла ябай граждандар түгел, әлеге лә баяғы, иң бай ҡатламдар ғына эҙләп таба.

Әгәр һалымдар йәмғиәт өсөн отошло итеп тәғәйенләнһә, бер районда ғына бер йыл эсендә айырылышҡан 400-ләп парҙың 12 млн 300 һум аҡсаһына нимә төҙөргә, ниндәй эштәр башҡарырға булыр ине икән? Тик уңмаған тормошо өсөн әхлаҡи көсөргәнеш кисереүселәргә матди проблемаларҙы ла өҫтәү дөрөҫ булырмы һуң?

Һалымдар тураһында фекер йөрөткәндә, ирекһеҙҙән, Рәсәй ғалимы, Нобель премияһы лауреаты Ж.И. Алферовтың интернет селтәрендәге: "Әгәр ҙә граждандарға пенсияны үҙ аҡсаһынан йыйырға, дауаланыу, белем алыу, торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн тулыһынса баҙар хаҡы менән түләргә тура килә икән, нимә өсөн мин һалым түләргә һәм бер ғәскәр чиновникты ҡарарға тейешмен? Белем биреү һәм медицина хеҙмәте бюджет аҡсаһына күрһәтелергә тейеш. Әгәр ҙә дәүләт был хәстәрҙе үҙебеҙгә йөкмәтә икән, уның беҙгә кәрәге бармы?" - тигән фекере иҫкә төшә. Төптәнерәк уйлаһаң, был һүҙҙәрҙә лә килешерҙәй урын күрәһең.

## Был нимәгә килтерер?

Ғаилә - йәмғиәттең бәләкәй генә бер социаль өлкәһе, тибеҙ. Ҙур күләмдәге штрафтар индереп кенә ғаилә нигеҙен һаҡлап булмауын күптәр яҡшы аңлайҙыр. Әгәр ҙә дәүләт үҙ граждандарының мәнфәғәтен нығыраҡ ҡайғыртһа, тотороҡло эш урындары булдырып, тейешле эш хаҡы түләһә, күптәрҙең ғаилә тормошо нығыраҡ та, оҙайлыраҡ та булмаҫ инеме ни? Бөгөн, ни тиклем генә әсе булмаһын, илдәге иҡтисади үҙгәрештәрҙең ғаилә тормошона ла һәләкәт менән янауын танырға тура килә. Был урында башҡорт халҡының "юҡлыҡ талаштыра, барлыҡ яраштыра", тигән аҡыллы һүҙҙәренең ни тиклем дә тапҡыр әйтелеүенә тағы бер инанаһың.

Әлеге ваҡытта шундай күренеш ныҡлы күҙгә салына. Совет осоронда йәшәп өлгөргән быуын Европа илдәренең мәҙәниәтен инҡар итеп, урта быуын уға күҙ йомоп маташһа ла, бөгөнгө заман вәкилдәре иһә уны ҙур теләк менән үҙләштерә бит. Европа традициялары буйынса туйҙар үткәреп, Рәсәй ҡанундары буйынса йәшәп буламы һуң? Нилектән йәштәребеҙ сит ил ҡалыбына эйәрә, уларҙың өлгөһөн эталон итеп ала башланы? Үҙебеҙҙең бына тигән туй йолаларыбыҙ, йәш ир һәм ҡатынға бирелгән аҡыллы өгөт-нәсихәттәребеҙ ниңә ситтә тороп ҡала?

Тәү ҡарамаҡҡа әллә ни иғтибарға алырлыҡ күренештәр булмаһа ла, әле был хәлдәргә күҙ йомоп ҡарауыбыҙ бер көн килеп үҙ емештәрен бирә башламаҫмы, тигән уйға һала. Шуға күрә лә, тарҡалған ғаиләләр иҫәбен саҡ ҡына булһа ла кәметеү маҡсатында өйләнешеүҙең еңел-елпе генә аҙым булмауын кесе йәштән аңға һеңдереп, үҙ ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, йолаларыбыҙ нигеҙендә туйҙар үткәреүҙе ҡанун итеп алыу кәрәктер, тигән тәҡдим тыуа. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

---

Һәр кешегә күңелендә урын әҙерлә, ул унда инһен, оҡшаһа - ҡалыр, оҡшамаһа - сығып китер, ти бер ғалим. Йәғни бер кемгә лә дуҫлыҡ, теләктәшлек ишектәрен ябырға ярамай. Рәнйеткәндәрҙе лә ғәфү итә белеү, үҙеңдән көсһөҙөрәктәргә лә тиң ҡарау - бөйөк бер ҡиммәт ул. Мәрхәмәтле булғандар ғына асыҡ йөҙлө, киң күңелле була. Ғәрәп ярымутрауы халҡы йөрәктәренә иман үтеп ингәнгә ҡәҙәр әҙәм балаһына ниндәй насар сифаттар хас булһа, шуларҙың барыһына ла эйә була. Ләкин Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тәрбиәһе уларҙың таштан ҡаты бәғерҙәрен йомшарта, күҙҙәрен аса. Үҙенә һәм яҡындарына яла яҡҡандарҙы, тән һәм йән ғазаптарына дусар иткәндәрҙе хәҡиҡәт хаҡына ғәфү итеү ни ҡәҙәр мәрхәмәт талап итә! Ҡылыс менән кешене насар ғәҙәттәрен ташларға, намаҙ уҡырға мәжбүр итеп була, ләкин кешелеклек сифаттары, хәҡиҡи ҡиммәттәр йөрәк аша ғына үтеп инә. Шуға күрә лә һәр тере затҡа мәрхәмәтле ҡараштa булған Бәйғәмбәр власты түгел, кешеләрҙең күңелдәрен яулай.

Бер алыштан һуң ҡулға алынған әсирҙәр килтерелә. Улар араһынан бер ҡатын йүгереп йөрөп балаһын эҙләй. Йән киҫәген табып алғас та, уны ҡулына алып, күкрәгенә ҡыҫып имеҙә башлай. Быны күреп торған Бәйғәмбәр сәхәбәләренә: "Нисек уйлайһығыҙ, был ҡатын үҙенең балаһын утҡа ырғытасаҡмы?"- тип һорай. Сәхәбәләр: "Юҡ, балаһын утҡа ырғытырға уны бер ни ҙә мәжбүр итә алмаясаҡ", - тип яуап бирә. Бәйғәмбәр: "Аллаһ үҙ ҡолдарына ҡарата был ҡатынға ҡарағанда ла рәхимлерәк", - тип әйтә. Тимәк, Аллаһы Тәғәлә беҙҙе утҡа ырғытырға ашыҡмай. Фани донъя һынауҙарын үтеп ҡотҡарылһын өсөн ул кешелеккә Изге китаптар, бәйғәмбәрҙәр ебәргән. Һәр беребеҙгә ғүмер, аңлау өсөн мөмкинлектәр, зиһен биргән. Дингә саҡырғанда Аллаһы Тәғәләнең асыуы менән кешеләрҙе ҡурҡытырға ярамай, Уның рәхимлелеге хаҡында күберәк һөйләп, ике донъя хәҡиҡәттәренә кешеләрҙе ылыҡтырырға кәрәк. Ҡатылыҡ, ҡәтғилек кешеләрҙе йыраҡлаштырыуы ғына мөмкин.

Ләкин рәхимлекте, мәрхәмәтте яҡшы булырға тырышып, башҡаларҙың насар эштәренә күҙ йомоу, тип тә аңларға ярамай. Кемдер икенсе берәү тураһында: "Ул шул тиклем мәрхәмәтле, беҙгә теләгәнебеҙҙе эшләргә мөмкинлек бирә", - тип әйтеүе мөмкин. Ләкин был мәрхәмәт түгел, был кеше теләктәренә эйәреүҙе аңлата. Ә ауыҙлыҡтан ысҡынған теләктәрҙең бер ваҡыт гонаһҡа килтерәсәге көн кеүек асыҡ.

Мәрхәмәт - ул бер нигә, хатта өгөтләгән кешенең ҡаршы килеүенә ҡарамаҫтан, уға файҙа килтереү ул. Әсә балаһының ҡайнар сәйнүккә китеп барыуын күрә. Мәрхәмәтле әсә ни эшләйәсәк? Күҙ нурын туҡтатыр өсөн уға, бәлки, ҡысҡырырға ла тура киләсәк. Балаһы тыңлашмаһа, башҡаса ул былай эшләмәһен өсөн шелтәләп тә аласаҡ. Ҡатыраҡ ҡыланған кеүек тойолор ситтән. Ләкин ул балаһының һаулығын ҡайғырта. Шулай уҡ әсә балаһының хәмер эсеп, зина ҡылып, башҡа боҙоҡлоҡтар эшләп, тамуҡ утына йүнәлеүен дә күрә. Ләкин мәрхәмәтле әсә шымып ҡалырмы быны күреп? Ул балаһын гонаһҡа батыуҙан, мәңгелек тормошон юғалтыуҙан һаҡлап ҡалыу өсөн бар көсөн һаласаҡ. Был осраҡта ҡәтғилек тә, ҡатылыҡ та кәрәк буласаҡ. Ләкин ул йәберләүгә, кешене шәхес булараҡ бөтөрөүгә йүнәлтелергә тейеш түгел.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Эшкә тоғролоҡ: ул эшлекле кешене буш хыялдар менән йәшәүсенән айыра**

Донъя үҙ эшенә тоғро булмайынса, ысын мәғәнәһендә бөйөк лидер булған бер генә кешене лә белмәй. Был хаҡта Эд Макэлрой бына нимә ти: "Эшкә тоғролоҡ беҙгә яңы көс бирә. Юлыбыҙҙа ауырыу, ярлылыҡ, бәхетһеҙлек тороу-тормауға ҡарамаҫтан, беҙ бер ваҡытта ла күҙ уңынан маҡсатыбыҙҙы юғалтмаясаҡбыҙ". Нимә ул эшкә тоғролоҡ? Һәр кем уны үҙенсә аңлай: боксер өсөн - ҡолаған еренән ҡолағанға ҡарағанда тиҙерәк аяҡҡа баҫыу һәләте; марафонсы өсөн - хәл бөткәндән һуң да тағы тиҫтә саҡырым йүгереү; һалдат өсөн - бейеклектең артында нимә көтөүен белмәгәндә лә, уның түбәһенә менеү; миссионер өсөн - башҡаларҙың тормошон яҡшыраҡ итеү хаҡына үҙеңдең уңайлы тормошоң менән хушлашыу; лидер өсөн ул ошо әйтелгәндәрҙең барыһы бергә һәм тағы ла артығыраҡ, сөнки артығыҙҙан эйәргән һәр кемдең яҙмышы һеҙгә бәйле. Әгәр һөҙөмтәле лидер булырға теләһәгеҙ, ахырғаса үҙ эшегеҙгә тоғро булырға тейешһегеҙ. Бурысҡа ысын бирелгәнлек башҡаларҙы ла ылыҡтыра һәм илһамландыра. Ылығыу ҡануны раҫлауынса, тәүҙә кешеләр - лидер артынан, һуңынан уның юғары хыялдары артынан эйәрә. Эшкә тоғролоҡтоң асылы нимәнән ғибәрәт? Әйҙәгеҙ, өс төп мәлде ҡарап үтәйек.

**Эшкә бирелгәнлек йөрәктә башлана.** Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәрендә нимәлер эшләү теләге барлыҡҡа килгәнгә тиклем мәсьәләнең тулыһынса хәл ителеүенә өмөтләнә. Ләкин һәр ҡаҙанышты эшкә тоғролоҡ оҙата бара. Мәҫәлән, сабышта еңеүсе ат кислород ресурсын беренсе ярым милдә үк файҙаланып бөтөрә лә, ҡалған дистанцияны йөрәк менән үтә. Тап шуға күрә барлыҡ бөйөк спортсылар ҙа был ағзаның ни тиклем мөһим булыуын раҫлай. Милли баскетбол ассоциацияһы легендаһы Майкл Джордан быны "тап йөрәк яҡшыны бөйөктән айыра", тип аңлата. Әгәр һеҙ лидер сифатындағы ғәмәлдәрегеҙ менән башҡаларҙың тормошон яҡшы яҡҡа үҙгәртергә теләһәгеҙ, ысынлап та, алдығыҙға ҡуйған маҡсатығыҙға тоғролоғоғоҙҙо белер өсөн йөрәгегеҙгә бағығыҙ.

**Эшкә тоғролоҡ аныҡ ғәмәлдәр менән раҫлана.** Эшкә тоғролоғоң тураһында һүҙ һөйләү - бер, ә уны тормошҡа ашырыу өсөн аныҡ эш башҡарыу икенсе нәмә. Артур Гордон был хаҡта былай тигән: "Һүҙ һөйләүҙән дә еңел нәмә юҡ. Көн һайын әйткән һүҙеңде үтәүе генә ауыр". Быны шундай миҫал да асыҡ күрһәтә. Бер ваҡыт бер судья үҙ округында һайлауҙарҙа еңеп сыға. Вазифаһына ултырғанда ул шулай ти: "Минең өсөн тауыш бирергә вәғәҙә иткән 424 һайлаусыға рәхмәт әйтергә теләйем. Шулай уҡ минең өсөн тауыш бирҙем тигән 316, һайлауҙарға килгән 47 кешегә лә рәхмәтлемен. Бигерәк тә минең өсөн тауыш биргән 26 кешегә рәхмәтем ҙур". Ә үҙегеҙгә алған бурысты үтәү һәм ниндәйҙер эшкә тоғро ҡалыу тураһында һүҙ барғанда һеҙ нимә эшләрһегеҙ?

**Эшкә тоғролоҡ ҡаҙаныштарға ишек аса.** Лидер сифатында һеҙгә бик күп ҡаршылыҡтар менән күҙгә-күҙ осрашырға тура киләсәк. Шул ваҡытта бары тик эшкә тоғролоҡ ҡына һеҙҙе алға этәреүсе берҙән-бер фактор булып ҡаласаҡ. Дэвид Макналли быны бик аныҡ билдәләгән: "Эшкә бирелгәнлек - һәр төрлө ҡаршы эшмәкәрлектең дошманы, сөнки ул һеҙҙе ҡеүәтле һөжүм нисә тапҡыр аяҡтан йығыуына ҡарамаҫтан, ҡабат аяҡҡа баҫып алға барырға вәғәҙә биргән берҙән-бер нәмә". Әгәр, ысынлап та, иғтибарға лайыҡ нимәлер ҡаҙанырға теләһәгеҙ, алдығыҙға ҡуйған маҡсатығыҙға тоғро булырға тейешһегеҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҠЫЙҒЫ РАЙОНЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**10-сы һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Хөсәйенов. Килмөхәмәтов. Шәлкем. Әһрам. Низағ. Мандара. Ралли. Редуктор. Раджа. Ноғоманов. Жакет. Санъяров. Әхи. Аҡыл. Фут. Өмөтбаев. Математик. Уйғыр. Батырова. Сабур. Дуға. Марабу. Эсемлек. Умарта. Йәннәт. Санитар. Флюс. Сыңғыҙов. Баҡса. Аламан. Олатай. Ағиҙел. Асыл.

**Вертикаль буйынса:** Әрем. Мәғрифәт. Буран. Тамбур. Драма. Дуэт. Ҡорт. Кеше. Нарвал. Карта. Мифтахова. Химик. Касса. Миғраж. Әсәй. Айыл. Әжәл. Сурағол. Аҙан. Натуралист. Матрос. Өслүб. Вандал. Алыш. Ананас. Өммәт. Улья. Ыласын. Буфер. Роза. Объект. Вигвам. Алатыр.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 март "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия
**16 март "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама
**19 март "Нәркәс"** (И.Йомағолов), мелоромантик трагедия
**20 март "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға"** (Т.Ғарипова), мюзикл
**21 март "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим), трагедия
**22 март "Мулла"** (Т.Миңнуллин), драматик хикәйә
**23 март "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф.Бүләков), музыкаль комедия

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 март "Автобус"** (С.Стратиев), комедия. Башлана 18.00
**18 март "Тоҡ эсендәге бесәй йәки Башкирская пленница"** (М.Кәрим), спектакль-концерт
**21 март "Чиполлино"** (Д.Родари), мажара. Башлана 11.00

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сығыу | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ахшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (16) дүшәмбе | 6:58 | 8:28 | 14:30 | 18:51 | 20:21 | 21:51 |
| 18 (17) шишәмбе | 6:56 | 8:26 | 14:30 | 18:53 | 20:23 | 21:53 |
| 19 (18) шаршамбы | 6:53 | 8:23 | 14:30 | 18:55 | 20:25 | 21:55 |
| 20 (19) кесе йома | 6:51 | 8:21 | 14:30 | 18:57 | 20:27 | 21:57 |
| 21 (20) йома | 6:48 | 8:18 | 14:30 | 18:59 | 20:29 | 21:59 |
| 22 (21) шәмбе | 6:46 | 8:16 | 14:30 | 19:01 | 20:31 | 22:01 |
| 23 (22) йәкшәмбе | 6:43 | 8:13 | 14:30 | 19:03 | 20:33 | 22:03 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺЫУ ТАШАМЫ, ЮҠМЫ?



**Быйылғы ташҡын ваҡытында Башҡортостандың төп йылғаларының максималь кимәле уртаса сиктә көтөлә, тип хәбәр итте Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхиттең мониторингы буйынса идаралыҡ начальнигы Вилора Горохольская.**

Башҡортостан Гидрометеорология етәксеһе хәбәр итеүенсә, тупраҡтың көҙгө дымлылығы был миҙгелдә норманан 25 процентҡа юғарыраҡ. Ағиҙел йылғаһы бассейнында ҡар запасы норманан 10-50 процентҡа артығыраҡ. Тупраҡтың туңыуы норманан 30-35 сантиметрға түбәнерәк. "Был фактор, һыуҙың әкренләп ергә һеңеүенә шарттар тыуҙырасаҡ. Йыш ҡына һыу кимәле ерҙең тәрән туңыуы арҡаһында ергә һеңә алмағанлыҡтан оҙаҡ тора", - тип аңлатты Вилора Горохольская.

Мартта Цельсий буйынса уртаса минус 4 -7 градус температура күҙаллана. "Температураның байтаҡҡа күтәрелеүен көтмәйбеҙ. Яуым-төшөмгә килгәндә, 12-13 марттан алып төбәк Себер антициклоны тылында булыуы ихтимал. Әлеге прогнозда көндәрҙең йылы тороуы, ҡар, һуңынан ямғыр яуыуы ихтимал. Апрелдә Башҡортостанда температура норманан ике градусҡа юғарыраҡ, ә яуым-төшөмдөң 10-20 процентҡа норманан күберәк булыуы көтөлә", - тип аңлатты Башҡортостан Гидрометеорология начальнигы.

Гидрологтарҙың анализына ярашлы, быйылғы ташҡындың "тәүге мәғлүмәттәре" 1992 һәм 1998 йылдарҙың яҙына тап килә. "1992 йылда Өфөлә Ағиҙел кимәле 614 см тәшкил итте, 1998 йылда - 707", - тип комментарий бирҙе синоптик. Ошо прогноздарға ярашлы, Өфөлә Ағиҙел кимәле 670-770 см сиктәрендә булыуы көтөлә, ул норманан 10 сантиметрға түбәнерәк. Баш ҡаланың түбән участкаларын 720 см кимәлендә һыу баҫыуы ихтимал.

Стәрлетамаҡта Ағиҙел кимәле яҡынса 390-490 см тәшкил итәсәк - норманан 50 сантиметрға түбәнерәк. Шуға ҡарамаҫтан, Стәрле һәм Ашҡаҙар йылғалары ярҙарынан сыҡҡан осраҡта ҡаланы һыу баҫыуы ихтимал. Бөрөлә Ағиҙел 680-770 см кимәленә тиклем күтәреләсәк, ул норманан 10 сантиметрға юғарыраҡ. Бөрөлә һыу баҫыу көтөлмәй.

Бөтә факторҙарҙы иҫәпкә алғанда, йылғаларҙа боҙ тығындары ла булырға мөмкин. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы начальнигы Валерий Хисаметдинов билдәләүенсә, тығын урындары ведомство хеҙмәткәрҙәренә яҡшы билдәле. Ташҡын эҙемтәләрен иҫкәртеү буйынса бөтә эш системалы, алдан раҫланған план буйынса алып барыла. Ташҡын-2014 буйынса теүәлерәк прогноз 25 мартта төҙөләсәк, тип хәбәр итте Башҡортостан Гидрометеорология начальнигы.

**"Башинформ"дан.**

*ИҒЛАН*

Редакцияға **тәжрибәле бухгалтер** талап ителә. (347) **246-03-23, 253-25-44** телефондары буйынса мөрәжәғәт итергә.

✓ *Нимә тураһында һуң фильм? Һәр кемдең һайлау мөмкинлеге барлығы тураһында. Үҙ яҙмышынан ил яҙмышын өҫтөн ҡуя алған был ҡыҙҙар ошо юлды һайлауҙары менән үк сикһеҙ бәхетле.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ ҺЫЛЫУЫ ИКӘНҺЕҢ...



**"Һылыуҡай - 2014" Республика гүзәллек бәйгеһендә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Раушания Юлдыбаева Гран-при яуланы.**

Әле унынсы класта белем алып йөрөгән 16 йәшлек Йылайыр ҡыҙының яратҡан шөғөлдәренең береһе - бейеү. Ә киләсәктә ул балалар өсөн башҡорт театр мәктәбе асырға хыяллана. Конкурста беренсе урынға Санкт-Петербургта йәшәүсе Алина Байзакова, икенсе урынға Учалы һылыуы Лилиә Вилданова, өсөнсө урынға Ейәнсура районынан Ләйлә Харисова лайыҡ булды. Төп урындарҙан тыш, "Нәфис һылыуҡай", "Нурлы һылыуҡай", "Моңло һылыуҡай", "Иманлы һылыуҡай" кеүек номинациялар ҙа тапшырылды. Башҡорт һылыуы исеменә Башҡортостандан ғына түгел, ә Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан, Магнитогорскиҙан килгән 12 бәйгесе көс һынашты.

Быйыл 22-се тапҡыр уҙғарылған һылыулыҡ бәйгеһендә ҡатнашыусы ҡыҙҙар алдына ла, йылдағыса, туған телен, мәҙәниәтен, халыҡ йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен мотлаҡ белеү төп талап итеп ҡуйылғайны. Был талаптарҙың барыһы ла үтәлмәһә лә, ҡыҙҙар, ысынлап та, йөҙ-ҡиәфәте менән бик һылыу ине. Әммә һылыулыҡ... сәхнәлә, туйҙа кәрәк, ә был донъяла кеше булып йәшәү, артабан үҙ тоҡомоңдо, милләтеңде дауам итеү өсөн, әлбиттә, туған телеңде, үҙ халҡыңдың мәҙәниәтен биш бармағыңдай белеү мотлаҡ. Был турала хәҙер йәштәр араһында ла күп һөйләнелә. Әлеге конкурстан һуң да яңғыраны унда ҡатнашыусыларҙың туған телендә матур итеп һөйләшә белмәүе тураһындағы фекерҙәр. Тимәк, конкурсты ойоштороусылар киләсәктә быны төп талап итеп алырына өмөт итәйек.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЕТЕГӘН ЙОНДОҘ -

## ете ҡыҙ

**Баш ҡаланың "Родина" кинотеатрында башҡорт халыҡ легендалары һәм йырҙары буйынса төшөрөлгән "Етегән" художестволы музыкаль фильмын презентациялау үтте. БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Президенты гранты ярҙамында тормошҡа ашырыу мөмкин булған был яңы фильмдың продюсеры, оператор-ҡуйыусыһы Рияз Исхаҡов менән режиссер-ҡуйыусы Айсыуаҡ Йомағоловтарҙың исеме милли кино һөйөүселәргә яҡшы таныш.**




Фильмдың нигеҙендә ете ҡыҙ тураһындағы моңһоу легенда ята. Әммә уны ҡатын-ҡыҙҙың ауыр яҙмышы хаҡындағы хикәйәт итеп йәки халҡыбыҙҙың данлы-ҡанлы тарихын һүрәтләү тип тә ҡабул итмәгеҙ. Нимә тураһында һуң фильм? Һис шикһеҙ, мөхәббәт хаҡында. Һәм тағы ла был тормошта һәр кемдең һайлау мөмкинлеге барлығы тураһында. Ғәзиз тыуған ерен, һөйгән йәренең намыҫын һаҡлап, бишек бәүелтер ҡулдарына ҡорал тотоуы, дошман иркенә бирелеүгә ҡарағанда үлемде һайлауы һәм һуңынан бала саҡтан һәр кемебеҙгә яҡшы таныш Етегән йондоҙона әүерелеүе... Тимәк, үҙ яҙмышынан ил яҙмышын өҫтөн ҡуя алған был ҡыҙҙар ошо юлды һайлауҙары менән үк сикһеҙ бәхетле. Һәр хәлдә, залда ултырған тамашасының тап шундай мөнәсәбәттәр заманында бер аҙ ғына булһа ла йәшәп ҡарағыһы килгәндер, моғайын.

Фильмда бер сюжет буйынса бер-береһенә үрелеп барған йырҙар заманса яңғырашы менән генә түгел, ә һирәгерәк башҡарылған йырҙар исемлегенән булыуы ла уңышлы булды. Кино төшөрөүселәрҙең кейемдәргә иғтибарлылығы, бутафор сәхнә кейемдәренән баш тартып, махсус костюмдар тектереүе лә уны бер баҫҡысҡа юғары күтәрә. Һәр хәлдә, был фильмда һәр нәмә үҙ урынында, төрлө пландағы актерҙар ҙа, хатта тәбиғәт тә. Тимәк, башҡорт кино сәнғәтендә тағы ла бер матур йөкмәткеле фильм барлыҡҡа килде, тип тулы ышаныс менән әйтә алабыҙҙыр, моғайын.

Бала бишегенә ҡушып, бөтөн донъяны үҙ ҡулдарында бәүелткән ҡатын-ҡыҙҙың яҙмышы тураһындағы "Етегән" музыкаль фильмы әлеге ваҡытта республика ҡалалары буйлап сәйәхәткә сыҡты, тиҙҙән уны Башҡортостан юлдаш каналында ла күрергә мөмкин буласаҡ.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭСЕҢДӘГЕН...

## эсеңдә серетмә

Өләшсегә - өс өйрәк, белмәгәнгә - бүҙәнә, алты һартҡа - бер тартай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡыллы һығымталар етмәгән урында һәр саҡ ҡысҡырыш-талаш өҫтөнлөк итә.

**(Леонардо да Винчи).**

Бөтөн яҡтан да камил никах тәбиғәттә юҡ, сөнки кешеләр үҙҙәре лә бөтөн яҡтан камил түгел.

**(Инга Берристер).**

Хоҙай бөйөк кешенең төрлө мохтажлыҡтар менән көрәшен күҙәтергә ярата.

**(Роберт Бартон).**

Үҙ хаталарыңды таныу - бөйөк батырлыҡ ул.

**(Александр Бестужев).**

Ғүмереңдә, һиңә аҙ ғына йәшәргә ҡалған кеүек, самалап, үлсәп тотон.

**(Биант).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер бай ғына кеше үҙенең өйөндә булған ҙур майшәмде сиркәүгә бүләк итә. Был ваҡиғанан һуң уға дәрүиш һынында Хоҙай килә һәм былдай йомартлығы өсөн уны бүләкләргә теләүен әйтә. Байҙың: "Ниндәй бүләк?" - тигән һорауына Хоҙай: "Һин үлем көтмәй, бер хәсрәтһеҙ йәшәүҙе дауам ит, ә мин һиңә үлем тураһында алдан өс тапҡыр иҫкәртермен", - ти. Бик шатлана быға бай кеше, бер ҡайғыһыҙ, үлем тураһында уйламай, балда-майҙа йөҙөп, күңел асып йәшәй бирә. Йылдар үтә, был кеше ҡартая, тубыҡтары бөгөлмәй, арҡаһы бөксәйә һәм ул таяҡтарға таянырға мәжбүр була. Тағы ла күпмелер ваҡыттан ул һуҡырая, һуңынан һаңғыраулана. Бөксәйгән, һуҡыр һәм һаңғырау килеш тә ул элеккесә бер ни уйламай, шау-шыулы күңел асыуҙар менән йәшәүҙе дауам итә.**

**Бына берҙән-бер көндө уға тағы Хоҙай килә һәм уны теге донъяға алып китәсәге тураһында белдерә. Бай кеше былдай хәбәрҙе көтмәй һәм: "Ә ниңә мине, вәғәҙә иткәнсә, өс тапҡыр үлем тураһында иҫкәртмәнең?" - тип, Хоҙайға дәғүәләрен белдерә башлай. Хоҙай уға яуап итеп шулай ти:"Ә мин һине иҫкәртмәнемме ни? Мин һин бөксәңләһен өсөн арҡаңа һәм тубыҡтарыңа һуҡманыммы? Һин һуҡырайһын өсөн балдағымды күҙҙәреңә ҡуйманыммы? Һин һаңғыраулынһын өсөн ҡолаҡтарыңа ҡағылманыммы? Вәғәҙә иткәндәремде үтәнем, хәҙер инде минең арттан эйәр..." Бай кеше Уның ишараларын аңламауын, үлемгә әҙерләнеп өлгөрмәүен әйтеп, хөкөмдө кисектереүен һорап инәлә башлай. Әммә Хоҙай ҡырт киҫә: "Әйҙә, әйҙә, мин һинең өсөн ошонан да артыҡ ғәҙел була алмайым..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 14 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5153
Заказ 802